ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

4-10 февраль (шаҡай) 2023

№4 (1046)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ул һуғышты күргән,**

ул тормоштоң ҡәҙерен белә...



8-9

**Һаулығыңдың ҡәҙерен...**

һау саҡта бел



9

**Кемдәр улар -**

бөгөнгө ауылды йәшәтеүселәр?



11

**Былдай музейҙар...**

Ҡытайҙа, Эске Монголияла ғына бар



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Яңы 2023 йылда ла "Киске Өфө" менән бергә ҡалыуығыҙға сикһеҙ рәхмәтлебеҙ. Әйләнә-тирәгеҙҙә гәзитебеҙгә яҙылырға өлгөрмәй йә онотоп ҡалыусылар булһа, әйтә күрегеҙ: улар "Киске Өфө"гә (ПР905 индекс) 17 февралгә тиклем яҙылып, марттан алдыра башлай ала. Дүрт айға яҙылыу хаҡы - 532 һум 40 тин тора. Бергә булайыҡ!***

КӨНАУАЗ



**Һүҙҙе алыҫтаныраҡ башларға тура килә, мәҫәлән, ҡасандыр, беҙҙең эраға тиклем меңәр йылдар элек йәшәгән Ирландия иле хаҡында. Төньяҡ Европаның ҙур өлөшөн биләүсе был илдең атамаһы "Eire", йәғни "дәүләт" тигәнде аңлата. Бәхетһеҙлегенә күрә, ҡомһоҙ колонизатор, баҫҡынсы ил булып танылған Бөйөк Британия менән күрше булыуы Ирландияның яҙмышын хәл итә лә инде.**

# КЕШЕНЕҢ ҺҮҘЕ -

## аҡылының бизмәне

Күпте күргән, азатлыҡ һуғыштары һәм ихтилалдар кисергән ил 1948 йылда ғына үҙаллылыҡ яулай ала, ләкин туған теленән яҙа: әлеге көндә ирланд халҡының 90 проценты инглиз телендә һөйләшә. Улар араһында үҙ туған телен хәтерләүселәр булған хәлдә лә, "белемдәре" мәктәптә өйрәнгән һабаҡтарҙан ары китмәй. Шуны белеп тә, күпселеген иманы менән ҡеүәтле һәм сәмле илһөйәр һәм телһөйәр Дағстан егете, бил бирмәҫ көрәшсе Хәбиб Нурмөхәмәтов ирланд спортсыһы Макгрегорҙы үҙ телен белмәгәне өсөн бөтөн мир алдында рисуай итте, һәм дөрөҫ эшләне: уның кәмһетеүҙәренә түҙеп торманы. Ҡасандыр ҡаһарман һәм күпте кисергән ирланд халҡы үткәнен, нәҫел тамырҙарын да онотмағандыр, бәлки, ә бына әсә телдәре, ысынлап та, юҡҡа сыҡҡан. Боронғо тарихлы бай ирланд теле бөгөн был илдә, асылда, туған теле өсөн көрәшеүсе бәләкәй генә төркөм менән төпкөлдә йәшәүсе бер нисә тиҫтә пенсионерҙан башҡа берәүгә лә кәрәкмәй...

**(Дауамы 2-3-сө биттәрҙә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ОШО ИНДЕ...

## илһөйәрлек мәктәбе

**Шул тиклем матур бер спорт төрө тип әйтәйекме, борондан, ата-бабаларҙан килгән бик кәрәкле көнитмеш шөғөлө, һөнәрмәнлек тийәйекме уны - традицион йәйәнән уҡ атыуҙы үҙ итеүселәр ишәйә республикала. Олоһо ла, йәше лә, ир-егет тә, ҡатын-ҡыҙ ҙа ылыға хәҙер был һөнәрмәнлеккә. Ә инде балалар өсөн ул ысын мәғәнәһендә илһөйәрлек мәктәбенә әүерелә бара. Ишембай ҡалаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатында, мәҫәлән, күп һанлы балаларҙан торған оло бер команда тупланған хатта. Хәбәрсебеҙ шул команданан Ғазинур, Ислам, Рамазан исемле малайҙарҙы ошо көндәрҙә Ғафури районында үткән "Еҙем-Фест. Рәсәй халыҡтары уйындары" төбәк-ара ғаилә-спорт фестивалендә ҡатнашҡан мәлдә фотоға төшөрөп алған.**



**(Дауамы 16-сы биттә).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ***Бөгөн тормошобоҙҙа күп социаль мәсьәләләр йәмәғәт ойошмалары тарафынан тормошҡа ашырыла түгелме?***

***Руслан ЗАРИПОВ, Башҡортостан Республикаһының "Мин илһөйәр" граждандлыҡ-илһөйәрлек тәрбиәләү төбәк йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:*** Бөгөнгө көндә хәл ителәһе мәсьәләләр бик күп йәмғиәттә. Улар тормоштоң төрлө тармағына барып тоташа һәм бөтә йәмғиәт менән бергәләп йыйып сығыуҙы талап итә. Шуға күрә, ниндәй генә өлкәне алма, ул спорт булһынмы, илһөйәрлек темаһымы йәки бүтәндәреме - беҙҙең кеүек йәмәғәт ойошмалары, ата-әсәләр, уҡытыусылар һәм башҡалар берҙәм эшләгәндә генә ниндәйҙер ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшергә мөмкин. Ғөмүмән алғанда, һәр кем хәленән килгәнсә ғаиләләге, республикалағы, илдәге һәм тотош йәмғиәттәге тотороҡло үҫеш, алға китеш өсөн ярҙам итергә бурыслы. Был йәһәттән мин республикала эшләп килгән төрлө йәмәғәт ойошмаларының әүҙем эшмәкәрлеген билдәләп үтер инем. Ундағы энтузиастарҙың тырышлығы, бер хәлгә лә битараф булмауҙары әллә күпме эштәр башҡарырға булышлыҡ итә. Яҡшы күңелле, изге уйлы кеше булыу өсөн көслөлөк кәрәк. Һәм йәмәғәт ойошмаларында нәҡ ошондай кешеләр тупланып, индәренә ҙур һәм ауыр йөк артылдырып алға барыуҙарын дауам итеп кенә ҡалмайҙар, ә рухи көстәре менән дә бүлешәләр.

Бөгөнгө көндә бигерәк тә илһөйәрлек темаһы йәмғиәттә ҙур урын алып тора. Шуға күрә ошо өлкәлә эшләүсе йәмәғәт ойошмаларының, айырым кешеләрҙең хеҙмәтен баһалап үтергә кәрәк. Улар йәштәрҙе, балаларҙы илһөйәр итеп тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнай һәм илебеҙҙең яҡшы киләсәге өсөн хәҙерҙән үк ныҡлы нигеҙ булдыра. Беҙҙең ойошманың да эшмәкәрлеге нәҡ граждандлыҡ һәм илһөйәрлек тәрбиәләүгә ҡоролған. Беҙ ата-әсәләр, уҡытыусылар һәм балаларҙы бергә туплауҙы, тормошта килеп тыуған төрлө социаль мәсьәләләрҙе бергәләп хәл итеүҙе күҙ уңында тотоп эшләйбеҙ. Шулай уҡ тамырҙарыбыҙҙы, шәжәрәләрҙе, тыуған яҡты, туған телебеҙҙе һәм ғаилә мираҫтарын өйрәнеүгә лә ҙур иғтибар бүләбеҙ. Үҙ тарихын өйрәнгән, мәҙәниәтен белгән, тыуып үҫкән ерен һәм илен яратҡан, рухи байлыҡ тураһында онотмаған балалар тәрбиәләү тәүбурысыбыҙ булып тора.

12+

✓ *Инглиз теле беҙҙең тормошҡа һәм телмәребеҙгә лә "ҡыйыу" һәм ҡаршылыҡһыҙ рәүештә, һаман да тәрәнерәк үтеп инә бара, ни әйтерһегеҙ, йәмәғәт? Ирланд теле яҙмышы уйландырмаймы халҡыбыҙҙы?*

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# КИНО СӘНҒӘТЕ...

## мөһимерәк барыбер

***Рәйес ИСМӘҒИЛЕВ, РФ-ның атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, режиссер:*** Бөгөн республикабыҙҙа мәҙәниәт, сәнғәт, әҙәбиәт юғары үҫеш юлында, тип һанайым. Сөнки гәзит-журналдарыбыҙ, китаптарыбыҙ даими рәүештә нәшер ителеп бара, республиканың дүрт филармонияһы ла ең һыҙғанып эшләй, театрҙарҙа яңынан-яңы спектаклдәр ҡуйыла. Гәзиттәребеҙгә яҙылыу, мәҙәниәт усаҡтарына билеттар һатып алыу күләме, спектакль һәм концерттарҙың кимәле - икенсе мәсьәлә: был күрһәткестәр ниндәй булыуға ҡарамаҫтан, донъя күреп торалар.

Ә кино сәнғәтенә килгәндә, етәкселек был өлкәнең дә мөһимлеген аңлайҙыр, тим. Республика Башлығы Радий Хәбиров юҡҡа ғына кино эшмәкәрҙәрен йыйып һөйләшеп, уларҙың аһ-зарын, киләсәккә пландарын тыңламағандыр. Был өлкәгә, ниһайәт, шулай айырым иғтибар бүленеүен бик ҡыуанып ҡабул иттем. Сөнки үҙ заманында хатта В.И. Ленин: "Сәнғәттең барлыҡ төрҙәренән кино сәнғәте беҙҙең өсөн иң мөһиме булып тора", - тигән һәм уны күтәреүгә лә күп көс һалған. Ә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында С. Эйзенштейндың "Александр Невский" фильмы халыҡтың рухын күтәреп ебәреүҙә ҙур роль уйнаған. Киноның тәьҫире иҫ киткес ҙур һәм быны бөгөн барыһы ла яҡшы аңлай. Мәскәүҙәме, Голливудтамы, Һиндостандамы йәки Өфөлә төшөрөлгән булһынмы, кеше фильмды фильм тип ҡабул итә. Ләкин был кинотаҫмаларҙың барыһы ла бер кимәлдә юғары булһын өсөн беҙгә кадрҙар, заманса ҡорамалдар һәм шарттар кәрәк. "Мосфильм" ҙур бер кварталда урынлашһа, Голливуд киностудияһы Өфөнән дә ҙур булһа, беҙҙең "Башҡортостан" киностудияһы заманында республика Президенты Мортаза Рәхимов биргән айырым бинаны ниндәйҙер сәбәптән ҡулдан ысҡындырып, баш ҡалабыҙҙағы торлаҡ йорттоң беренсе ҡатында урынлашҡан. Уның үҙ павильондары ла, гаражы ла юҡ, хатта заманса ҡорамалдар менән тәьмин ителеш яғы ла аҡһай. Кино төшөрөү эшенең үҙенсәлектәренә ярашлы махсус йыһазландырылған бүлмәләр етешмәй. Республикабыҙҙың идеологияһын күтәргән киностудия ла театрҙарыбыҙ кеүек дәрәжәле булырға һәм айырым бинала урынлашырға тейеш бит.

Сәнғәт сәйәсәттән алыҫ тора, тиһәләр ҙә, был дөрөҫлөккә тап килмәй. Кем аҡса түләй, шул йыр һайлай. Шуға, үҙебеҙҙең халыҡҡа файҙа килтергән сәйәсәт алып барырға, бының өсөн башҡорт телендә, башҡорт халҡының көнкүрешен, йолаларын, менталитетын сағылдырған матур спектаклдәр, фильмдар күберәк ижад итеү мөһим. Үҙ идеяларыбыҙҙы тормошҡа ашырыр, башҡорт әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, сәнғәтен, тарихын, телен үҫтерер урын фәҡәт Башҡортостан ғына, һәм быларҙы ситтәр килеп беҙҙең өсөн эшләмәйәсәк.

Һәм тағы ла ҡырҡыу торған мәсьәләләрҙең береһе - кадрҙар. Минеңсә, һуңғы осорҙа мәҙәниәт, сәнғәт өлкәһендә кадрҙар әҙерләү эше туҡталып ҡалды. Сөнки, нимә тиһәләр ҙә, иң яҡшы театр, филармония, кино режиссерҙары Өфөлә түгел, Мәскәүҙә тәрбиәләнә. Бөгөн иң шәп спектаклдәр, тамашалар ҡуйған һәм фильмдар төшөргән кешеләребеҙ - ҡасандыр илебеҙ мәркәзендә белем эстәп ҡайтҡан белгестәр. Уларға алмаш үҫтереүҙе хәстәрләү кәрәк. Был беҙҙең төп бурыстарыбыҙҙың береһе.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

КӨНАУАЗ

# КЕШЕНЕҢ ҺҮҘЕ -

## аҡылының бизмәне



**(Башы 1-се биттә).**

Ғибрәтле тарихмы? Әйтергә лә түгел, тән сымырҙап китә. Ер йөҙөндә "үле телдәр" исемлеге аҙна һайын тип әйтерлек тулыланып тора. Ә бит, уйлап ҡараһаң, инглиз теле беҙҙең тормошҡа һәм телмәребеҙгә лә "ҡыйыу" һәм ҡаршылыҡһыҙ рәүештә, һаман да тәрәнерәк үтеп инә бара, ни әйтерһегеҙ, йәмәғәт? Ирланд теле яҙмышы уйландырмаймы халҡыбыҙҙы? Туған телгә битарафлыҡ һәм рыялыҡ бигерәк тә ҡалала йәшәүселәрҙән башлана. Әлеге ирланд теленең дә "башын ашаусы" инглиздәрҙән алда үҙ рухынан һәм телһөйәрлегенән яҙған ирланд халҡы, айырыуса уның ҡалаларҙа йәшәгән өлөшө ғәйепле, тип иҫәпләнә. Әйткәндәй, урыҫ теле яҙмышы өсөн дә саң ҡағыла бөгөн, сөнки ул да баяғы инглиз йоғонтоһона бирелеп бара бит...

Һәр хәлдә, Рәсәй Президенты Владимир Путин тарафынан мәҙәниәт өлкәһендә дәүләт сәйәсәте нигеҙҙәре тураһында указ юҡҡа ғына ҡабул ителмәне. Был документта рус телен һаҡлау һәм яҡлау, сит ил телдәрен самаһыҙ күп ҡулланыуға һәм һүгенеү һүҙҙәренә ҡаршы саралар хаҡында ла һүҙ бара. Дөрөҫ, был йәһәттән ниндәй аныҡ саралар ҡаралыуы әлегә аныҡ ҡына билдәле лә түгел, шулай ҙа Дәүләт Думаһының дәүләт төҙөлөшө комитеты рәйесе урынбаҫары Даниил Бессарабов телмәр мәҙәниәтен яҡшыртырға саҡырып, йәмәғәт урындарында тәртипһеҙ ҡыланыусы һәм һүгенеү һүҙҙәре ҡулланыусыларға ҡарата штраф түләтеү, телмәрҙә сит тел һүҙҙәрен ҡулланыуҙан ҡотолоу кәрәклеген әйтте. Ә бына "Нисек?" тигән һорауға, тәбиғи, бер ниндәй яуап юҡ.

Был күренеш беҙҙең тормошҡа ныҡлап үтеп инде. Телебеҙҙе сит, бигерәк тә, инглиз теле һүҙҙәре менән "байытыу", дөрөҫөн әйткәндә, үткән быуаттың 90-сы йылдарынан, илдәге яңы сәйәси һәм иҡтисади шарттарға бәйле бигерәк тә йылдамлашты. Бөгөн иһә интернет һәм электроникаға бәй-

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### ***Бөгөн тормошобоҙҙа күп социаль мәсьәләләр йәмәғәт ойошмалары тарафынан тормошҡа ашырыла түгелме?***

***Гөлшат ИБРАҺИМОВА, "Әсә йөрәге" әсәйҙәр советы" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе:*** Тормошта ниндәй генә хәлдәр килеп тыуып торһа ла, йәмғиәттә социаль мәсьәләләрҙе хәл итеүгә ҙур иғтибар бүленә. Был йәһәттән ил Хөкүмәте лә, төрлө йәмәғәт ойошмалары ла әүҙем эшләй һәм уңыштарға өлгәшә. Һәм әйтергә кәрәк, республикалағы дәүләт органдары йәмәғәт ойошмалары менән бергә төрлө проекттар өҫтөндә эшләй, сөнки берҙәм булғанда ғына теге йәки был мәсьәләне йырып сығырға, эште алға ебәрергә мөмкин.

Беҙҙең ойошма өс мендән ашыу ғаиләне берләштерә. Эшмәкәрлегебеҙ ғәрип балаларға һәм уларҙың ғаиләләренә социаль яҡлау күрһәтеүгә ҡайтып ҡала. Беҙ төрлө конкурстар, байрамдар ойошторабыҙ, ата-әсәйҙәргә һөнәри белемен камиллаштырырға булышлыҡ итәбеҙ, психотерапевтар ярҙамы күрһәтәбеҙ, шулай уҡ реабилитация һәм абилитация *(тормошҡа яраҡлаштырыу)* үтеүҙә килеп тыуған һорауҙарҙы сисеүгә бәйле консультациялар үткәрәбеҙ.

Был һан артында ҡоро статистика түгел, ә әллә күпме ғаиләнең көндәлек борсолоуҙары, иҫәпһеҙ-һанһыҙ мәшәҡәттәре һәм хәл итәһе мәсьәләләре тора. Әлбиттә, бөгөнгө көндә Хөкүмәт тарафынан ярҙам күрһәтелә: төрлө реабилитация үҙәктәре эшләй, торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә ярты-лаш түләү һәм башҡа төр ташламалар ҡаралған һәм башҡалар. Ләкин беҙҙең һәм башҡа ошондай йәмәғәт ойошмаларың эшмәкәрлеге лә мөһим роль уйнай, сөнки улар кешеләргә ышаныс бирә, рухи көс өҫтәй, йәмғиәткә берләшергә булышлыҡ итә. Ҡайһы саҡта йылы һүҙ ҙә ауыр хәлдә ҡалған кеше өсөн ҙур ярҙам. Йәмәғәт ойошмалары нәҡ ошондай рухи терәк булыу менән бер рәттән, хоҡуҡи, социаль ярҙам күрһәтеүсе лә һәм республикала эшләп килгән барлыҡ ошондай ойошмалар ҙа үҙ эшен юғары кимәлдә башҡара.

Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Медиалогияның 2022 йылда социаль медиала телгә алыу буйынса рейтингында етенсе урынды биләне. Рейтинг лидерҙары - Чечня башлығы Рамзан Ҡадиров, Мәскәү Мэры Сергей Собянин һәм Мәскәү өлкәһе губернаторы Андрей Воробьев. Бынан алдараҡ "Башинформ" Радий Хәбировтың Медиалогия компанияһы төҙөгән медиарейтингта Волга буйы федераль округындағы коллегалары араһында өсөнсө йыл рәттән беренсе урынды алыуын хәбәр иткәйне.

✓Рәсәйҙә 1 февралдән инвалидтарға, ветерандарға, СССР, Рәсәй Геройҙарына, Дан орденының тулы кавалерҙарына, Социалистик Хеҙмәт Геройҙарына, Рәсәйҙең Хеҙмәт Геройҙарына һәм Хеҙмәт даны орденының тулы кавалерҙарына, Чернобыль АЭС-ындағы, шулай уҡ 1957 йылда "Маяк" производство берекмәһендәге һәләкәттән һуң радиацияға дусар булған граждандарға, Семипалатинск полигонында үткәрелгән ядро һынауҙары һөҙөмтәһендә радиациянан зыян күргән граждандарға социаль түләүҙәр күләме арттырыла.

✓2023 йылдың 1 мартынан Башҡортостан мәктәптәрен, балалар баҡсаларын, дауаханаларын һәм башҡа социаль учреждениеларын газ менән тәьмин итеү бушлай ойошторола. "1 марттан хөкүмәттең технологик тоташтырыу тәртибе тураһында ҡарарына үҙгәрештәр көсөнә инә - йәғни беҙ белем биреү һәм медицина учреждениелары участкалары сигенә тиклем газды бушлай һуҙабыҙ. Был сығымдарҙы кәметергә һәм ошо мәсьәләне хәл итеүҙе еңеләйтергә тейеш", - тип билдәләне "Газпром Өфө төбәкара газ" генераль директоры Альберт Лоҡманов.

✓Башҡортостанда торлаҡты сафҡа индереү буйынса яңы рекорд ҡуйылды, тип хәбәр иттеләр республика Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтендә. Республика статистары мәғлүмәте буйынса, 2022 йылда торлаҡ төҙөлөшө темпы 3 миллион 62 мең квадрат метр күрһәткесенә еткән. Республикала файҙаланыуға тапшырылған торлаҡ күләме рекордлы 2021 йыл менән сағыштырғанда 105,4 процентҡа артҡан. Шәхси төҙөүселәргә 1,922 миллион квадрат метр сафҡа индерелгән торлаҡ тура килә. Был 2021 йылға ҡарағанда күберәк.

*✓ Беҙҙең чиновниктар сығыш яһағанда, һөйләгәндә һәм тел яҙмышы тураһында уйлағанда эште үҙҙәренән башлаһындар ине, сөнки рәсми-эш шарттарында улар тел ҡағыҙәләрен иң тәүҙә үҙҙәре боҙоуға булышлыҡ итә.*



ле һүҙҙәр күбәйҙе һәм бынан ҡотолоуы, бер яҡтан, маҡсатҡа ярашлы ла түгел кеүек, сөнки донъя кимәлендә алмашы булмаған компьютер, монитор, пейджер, файл, факс, драйвер, фейк кеүек төшөнсәләр ошо терминдар аша тормошобоҙҙа мәңгелеккә үҙ урынын алды. Ә бына сәйәсәт, иҡтисад, финанс, сәнәғәт һәм ауыл хужалығы өлкәләрендә сит һүҙҙәрҙән арыныу мөмкин, сөнки рус теленең яңы төшөнсәләрҙе атарлыҡ үҙ мөмкинлектәре һәм һүҙ байлығы етерлек. Бары тик иҡтисадсылар һәм финансистарға аудит, дилер, логистика, брокер, спонсор, кластер, йә булмаһа сәйәсәт өлкәһендә спикер, парламент, департамент, муниципалитет, легитимлыҡ, ә инде мәҙәниәт өлкәһендәге хит, шоу, бестселлер, дайджест, имидж, тинейджер, хиппи кеүек һүҙҙәрҙең мәғәнәһенә төшөнөп, уларҙың синонимдарын, мәғәнә берлегән белдергән варианттарын табыу һәм ҡулланыуға индереү бер ҙә ауыр эш түгел.

Тел белгесе, Рәсәй Фәндәр академияһының Орфография комиссияһы ағзаһы Мария Ровинская әйтмешләй, тел байлығыбыҙҙы һаҡлау, телмәребеҙҙе үҙ телебеҙҙәге һүҙҙәрҙе ҡулланып, аңлайышлы хәбәр һөйләү һәм аралашыу һәләтен үҫтереүҙе һәр кем үҙенән башларға тейеш. Дөрөҫөн әйткәндә, ти ул, беҙҙең закон сығарыусылар, чиновниктар, башҡа дәрәжәләге етәкселәр сығыш яһағанда, һөйләгәндә һәм тел яҙмышы тураһында уйлағанда эште үҙҙәренән башлаһындар ине, сөнки рәсми-эш шарттарында улар тел ҡағиҙәләрен иң тәүҙә үҙҙәре боҙоуға булышлыҡ итә, мотлаҡ сит тел һүҙҙәре ҡуллана. Әйтерһең дә, был уларға мәртәбә өҫтәй була, йәнәһе...

Рус телен һаҡлау, яҡлау, байытыу буйынса талаптар берҙәй үк кимәлдә беҙҙең башҡорт теленә лә ҡағыла. Хәйер, әсә телебеҙҙе һаҡлау ғына түгел, уны халыҡ теле һиңйылары менән байытыу, боронғо матур һүҙҙәребеҙҙе әүҙем ҡулланылышҡа ҡайтарыу, телебеҙҙе артабан үҫтереү тураһында беҙ туҡтауһыҙ яҙабыҙ, борсолабыҙ, миләттәштәребеҙҙе башҡорт теленә тоғролоҡҡа, үҙ телебеҙҙә аралашырға, ғаиләләрҙә балаларҙы үҙ телебеҙҙе өйрәтергә саҡырабыҙ һәм был турала арыу-талыуһыҙ ҡабатлап ҡына торабыҙ. Әйткәндәй, беҙҙең тел икеләтә йоғонтоға дусар: әлеге лә баяғы инглиз теленән үҙләштерелгән һүҙҙәр өҫтөнә рус һүҙҙәре ҡушып һөйләү һәм яҙыу ғәҙәткә ингән. Башҡортса яҙғанда быны тикшереп, төҙәтеп булһа ла, телмәр ағышында күптәрҙең рус һүҙҙәрен ҡушып һөйләүе "норма"ға әйләнгән. Ә шулай ҙа һуңғы йылдарҙа бындай хәлдәрҙә үҙенә тәнҡит күҙлегенән ҡарап, һәр һүҙен "үлсәп", таҙа башҡорт телмәре менән ҡыуандырыусылар ҙа бар. Ә кемгә саф башҡортса яҙыу-һөйләү ауырыраҡ бирелә, улар, тимәк, телмәр сифатын, дөйөм мәҙәни кимәлен яҡшыртыу өсөн күберәк башҡортса уҡырға, бының өсөн билдәле өлкән быуын классик яҙыусыларыбыҙҙың әҫәрҙәренән өйрәнергә, гәзит-журналдар уҡырға тейештәр, моғайын. Үҙ өҫтөндә эшләү генә етмәй, балаларыбыҙҙы таҙа телмәргә өйрәтеү ата-әсәләр менән бергә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының да мөһим бурысы. Шуны онотмайыҡ: халҡыбыҙ әйтмешләй, кешенең һүҙе - аҡылының бизмәне ул.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТЕМ ӘЙТТЕМ...

# ҮТКӘНДӘРГӘ - ШЫРПЫ,

## киләсәген ишәк уйлаһын

**Бөгөнгө заманда изгелек эшләүгә ҡарағанда изгелек көтөү ғәҙәти, миңенсә. Ғәҙәти, сөнки изгелек ҡылыуға ҡарағанда уны көтөү еңелерәк. Әлбиттә, көтөү ҙә еңелдән түгел: беҙгә бит теләктәрҙең (изгемеүкмы, уйлап та бирмәйбеҙ!) тормошҡа ашыуы бөгөн һәм хәҙер кәрәк, сөнки бала саҡтан ҡалған сабырһыҙлыҡ ғәҙәте ғүмер буйы оҙатып йөрөй.**

Был донъяла сабырлыҡ һәм тәүбә ҡыла белеү иң юғары кәстәр икәнен онотмаһаҡ ине. Сөнки, иғтибар итһәгеҙ, Көнбайыш Европа менән Америкала кешеләрҙең йәшәйешен көйләү системаһы бөгөнгө көн менән йәшәүгә йүнәлтелгән: үткәндәргә - шырпы, киләсәген ишәк уйлаһын, тигән һымаҡ. Тимәк, үҙеңдән бөгөнгөң өсөн генә йәшә, эгоңды әпәүләп кенә тор, башҡаларҙа эшең булмаһын, уларҙың хәстәре - төштән һуң. Элек ете ятып бер төшөбөҙгә лә инмәгән ошо сит идеология бөгөн беҙгә лә көсләп тағыла, калька формаһында сәйнәп йәбештерелә. Үҙен генә һөйгәндәрҙең башҡаларҙы ҡайғыртыуға мөмкинлеге лә, ваҡыты ла юҡ - изгелек ҡылыу тураһында әйтеп тә тормайыҡ.

Изгелек эшләүҙең тағы бер әтнәкәһе бар: уның хаҡы билдәһеҙ - бына был изгелегем шунса тарта, тип, баһалап булмай - рәхимлекте ихлас ҡылһаң, рәхмәтен дә ихлас әйтерҙәр.

Бала саҡта ишеткән кинәйә хәтерҙән сыҡмай. Бер бабай мисәүле аттар егелгән арбала кисеүҙән йылға аша сығып барғанда, арба тәгәрмәстәренең берәһе онтала. Был хәлде күргән бер йәш егет ярҙамға ташлана. Ярға сыҡҡас, бабай әйтә икән:

- Рәхмәт, тип әйтә алмайым, улым, күп булыр, ике аттың берәһен ал.

Тимәк, рәхмәт аттан ҡиммәтерәк! Башҡорт өсөн ат бик ҡиммәт икәнен иҫәпкә алһаҡ, рәхмәт хаҡы ла шунса арта.

Әммә тағы бер әтнәкә бар: изгелек бит рәхмәт һүҙҙәре ишетеү өсөн дә эшләнмәй, буш эшләнә. Буштың атаһы үлгән, тигән заманда был аксиома, бәлки, сәйер яңғырайҙыр ҙа, әммә күңел төрөндәге рухи ҡиммәттәр даимилыҡ хәлендә булырға тейеш, шунһыҙ кешелектең йәшәйеш тәртибе боҙола - изгелек-яуызлыҡ бизмәненең яуызлыҡ яғы аҫҡа тарта башлай.

"На миру и смерть красна", тигән мәҡәл бар, йәғни башҡалар һинең батырлығыңды, әлеге фекер йүнәлешендә изгелек эшләүеңде күрһәләр, баһа бирһәләр генә һинең эгоң ҡәнәғәт була, шул саҡта ғына изгелек изгелек була. Һуң, ата-бабаларыбыҙ, ҡылған изгелегеңде һыуға һал, тигән дә баһа! Берҙә генә лә миҙал итеп түшеңә тағып йөрө, тимәгән. "Әгәр саҙаҡаларҙы асыҡ (күрһәтеп) бирһәгеҙ икән - был яҡшы; ярлыларға биргән ваҡытта йәшереп бирһәгеҙ - был һеҙгә һәйбәтерәк һәм ул һеҙҙең насар эштәрегеҙҙе ҡаплай: ысынлап та, Аллаһ һеҙ эшләгән эштәрҙән хәбәрҙар!" тиелә Әл-Бәҡара (Һыйыр) сүрәһенең 271-се аятында. Изгелек-саҙаҡа йәшереп эшләнергә тейешлеген әйтә бит Ҡөрьәндәге Аллаһ һүҙҙәре!

Бөгөнгө мәғлүмәт донъяһында үҙеңдең эгоңды кәперәйтеү мөмкинлектәре шул тиклем киңәйҙе, әйҙә, уңлы-һуллы тарат үҙеңдең һәр бер ғәмәлеңде, изге булыуыңды күрһәт - өрмәгән ергә ултыртмаһыңдар. Төптән уйлаһаң, изгелек бит ата-әсәңә, туғандарыңа, яҡындарыңа, күрше-тирәңә - эргәңдә булғандарға ниндәйҙер яҡшы ғәмәл ҡылыуҙан башлана, зурҙан ҡуптарылып аҫҡа төшмәй, ундайҙарҙы шапырыныу кеүек ҡабул ителәр. Иң үкенеслеһе шул: изгелек ҡылыуҙың асылын аңламағандарҙың арзан өлгөләрен йәш быуын үрнәк кеүек ҡабул итә, күрәһең, лайыҡлымы-түгелме, лайк-рәхмәттәрҙән ләззәт табып йәшәү заманы килде...

Шулай итеп, күрәһең, изгелек ҡылып, рәхмәт көтмәгәндәр өсөн генә бөтә кешеләр ҙә туған һәм яҡындыр - Ҙур бер ғаилә кеүек!

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Бөгөн тормошобоҙҙа күп социаль мәсьәләләр йәмәғәт ойошмалары тарафынан тормошҡа ашырыла түгелме?***

***Тамара МАЛБАЕВА, Көйөргәҙе районы "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы етәксеһе:*** Алдыбыҙға ниндәй мәсьәләләр, бурыстар ҡуйылһа ла, үҙебеҙ ниндәйерәк эш башҡарырға уйлаһаҡ та, күберәген нәҡ йәмәғәт ойошмалары ошо эштәрҙе башлап ебәрә. Йәмәғәт ойошмалары республикала берҙәм, әүҙем һәм һөҙөмтәле эшләй. Мәсьәлән, күптән түгел беҙҙең районда Әсәйҙәр комитеты төҙөлдө. Улар махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан ир-егеттәрҙең ата-әсәләре, ғаиләләре менән тығыҙ бәйләнеш тота һәм уларға ниндәй ярҙам кәрәклеген белеп, тиҙ арала хәл итергә тырыша. Шулай уҡ бөгөн яраланып ҡайтҡан егеттәребеҙ ҙә бар, уларға ла төрлө яҡлап ярҙам күрһәтеү өҫтөндә эшләйҙәр. Беҙҙең халыҡта баҫалҡылыҡ көслө һәм яраланып ҡайтҡан егеттәребеҙҙән ҡайһы берҙәре үҙҙәренә тейеш ярҙамды ла алырға, ғөмүмән, ниндәйҙер ярҙам һорарға ла ҡыймайҙар. Ошондай саҡта Әсәләр комитеты бөтә тейешле ярҙамдың күрһәтелеүенә булышлыҡ итә. Беҙҙең райондан киткән һәр бер егетҡә айырым посылкалар әҙерләнә. Был акцияны "Әсәйемдең йылы ҡулдары" тип атаныҡ һәм хәрби операцияла ҡатнашҡан һәр районлашыбыҙға беҙҙең балабыҙҙың да йөрәктән сыҡҡан изге теләктәребеҙ тыуған йорт йылыһы булып барып етеп, аҙ булһа ла ауырлыҡтарҙы онотоп торорға ярҙам итәлер, тип ышанабыҙ.

Ауыл советтары, район хакимиәттәренең эше - бер, ә тотош халыҡтың, йәмәғәт ойошмаларының берҙәм күтәрелеп, ошондай эшмәкәрлек алып барыуы - икенсе хәл. Элек-электән ниндәйҙер мөһим эште башлар алдынан ололар йыйылып, кәңәш ҡорғандар. Бөгөнгө көндә лә күп эштең башында ололар, йәмәғәт ойошмалары тора. Бигерәк тә "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының әүҙемлеген танымай булмай. Улар онотолоп барған йолаларыбыҙҙы, кәсептәребеҙҙе, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе тергеҙеү менән генә шөғөлләнеп ҡалмай, бөгөнгө ауырлыҡтар мәлендә берләшеүгә, еңеп сығыуға өндәй, гуманитар ярҙам ойоштороу буйынса ҙур эштәр атҡара.

Шулай уҡ туған тел мәсьәләһе лә бит иң тәүҙә нәҡ йәмәғәт ойошмалары тарафынан әүҙем күтәрелеп сыға. Улар балалар баҡсаһына, мәктәптәргә барып, ошо юҫыҡта төрлө саралар үткәрә, акциялар ойоштора. Йәмәғәт ойошмаларының фекеренә халыҡ та ҡолаҡ һала - шуныһы хуп. Ғөмүмән, айырым кешенең генә ниндәйҙер мәсьәләне күтәреп сығыуына ҡарағанда, йәмәғәт ойошмаһының ошо эшкә тотоноуы күпкә файҙалыраҡ һәм отошлораҡ. Халҡыбыҙ юҡҡа ғына "Күмәкләгән - яу ҡайтарған", тимәгән бит. Шуға күрә, йәмәғәт ойошмалары беҙҙең йәшәйешебеҙҙе яҡшыртыусы, ыңғай яҡҡа алып барыусы бер күренеш, тип уйлайым.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Махсус хәрби операция бөлеге булған яңы тарих дәреслектәре Рәсәй мәктәптәренә киләһе уҡыу йылынан уҡ индерелә башлай. Илдең мәғариф министры Сергей Кравцов "Суверенлы милли мәғариф системаһын үҫтереү хаҡында" лекцияһы ваҡытында ошо турала белдерҙе, тип хәбәр итә федераль киң мәғлүмәт саралары. "Юғары класс уҡыусылары өсөн дәреслек мартта әҙер була, киләһе уҡыу йылында ул мәктәптәргә барып етер тип ышанам", - тип Кравцовтың һүҙҙәренә килтерә федераль баҫмалар.

✓Февралдә рәсәйҙәрҙе Ватанды һаҡлаусылар көнө уңайынан оҙайлы ялдар көтә, тип хәбәр итте Роструд. "Февраль айында илебеҙ Ватанды һаҡлаусылар көнөн билдәләй. 23 февраль кесаҙнаға тап килә. 1 ғинуарҙағы ял көнө 24 февралгә (йомаға) күсерелгән, был аҙнаһына биш көн эшләгән граждандарға 23 февралдән 26-һына тиклем ял итергә мөмкинлек бирә", - тиелә ведомство белдереүендә. 22 февралдә эш көнө, байрам алды көнө булғанлыҡтан, бер сәғәткә ҡыҫҡара.

✓Башҡортостан Хөкүмәте хеҙмәткәрҙәргә мохтаж ойошмалар, шулай уҡ талап ителгән һөнәрҙәр исемлеген рәҫланы. Рәҫланған исемлеккә - республиканың 55 предприятиеһы. Улар араһында КумАПП, БМК, "НефАЗ", "Стеклонит", Туймазы бетон ташыу машиналары заводы, "ОДК-УМПО", "ЕСМ", Салауат химия заводы, "Витязь" машиналар эшләү компанияһы, Росстандарттың төбәк үҙәге һәм башҡа ойошмалар бар. Талап ителгән 77 һөнәр иҫәбендә - аккумуляторсы, гальваник, кейем бесеүсе, маляр, участка мастеры, крансы, слесарь, термист, токарь, тегенсе һәм башҡалар.

✓Башҡортостандың социаль-иҡтисади үҫешен оҙайлы ҡуҙаллауға ярашлы, 2036 йылға көтөлгән ғүмер оҙайлығы 73,66 йәшкә етергә тейеш, был 2021 йылғы кимәлдән 6 процентҡа юғарыраҡ. Консерватив сценарий буйынса, 3,9 процент, 72,18 йәшкәсә артыуы ихтимал. 2025 йылда төп вариантта ғүмер оҙайлығы - 71,13 йәшкә хәтлем (2021 йылға +2.4 процент ), ә консерватив вариантта 70,92 йәшкәсә (+2,1 процент) арта. Был сабыйҙар үлеме, шулай уҡ эшкә һәләтле йәштә вафат булыу осраҡтарының кәмеүенә бәйле булыр тип көтөлә.

✓ "Автоматик синхрон тәржемәсе башҡорт телендәге телмәрҙе башҡа телдәргә тәржемә итһен. Һәр кеше интернетта туған телендә мәғлүмәт тапһын өсөн беҙгә был йүнәлештә эште арттырырға кәрәк".



ҠЫҪҠАСА

# ҺОРАУҘАРҘЫ - ҠОРОЛТАЙҒА

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев республика халҡынан махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә булышлыҡ итеү буйынса һорауҙарҙы Ҡоролтайға ебәреүҙәрен һораны:** "Башҡортостанда яугирҙарҙың ғаиләләре транспорт һалымын түләүҙән азат ителгән, мохтаждарға бушлай социаль хеҙмәттәр күрһәтелә, баҙар хаҡынан түбәнерәк хаҡҡа торлаҡ һатып алыу мөмкинлеге бирелгән, ә ауылда ер участкаһы булғандар тәү сиратта ағас алыу хоҡуғына эйә, - тине Константин Толкачев. - Эш дауам итә. Беҙ башҡа төбәктәрҙең тәжрибәһен өйрәнәбеҙ, граждандарҙың мөрәжәғәттәрен ҡарайбыҙ. Республика Хөкүмәте менән берлектә өҫтәмә ярҙам саралары буйынса тәҡдимдәр әҙерләйбеҙ. Шуға күрә һәр ҡарарыбыҙ аталары, ирҙәре, улдары махсус хәрби операция зонаһында илебеҙ мәнфәғәттәрен яҡлаған ғаиләләрҙең тормошон күпкә еңеләйтергә тейеш". Һорауҙарҙы kurultay@gsrb.ru электрон почтаһына йәки 450008, Өфө, Зәки Вәлиди урамы, 46 адресына ебәрергә мөмкин.

✓ **Башҡортостандан Ҡытайға 192 тонна етен орлоғо оҙатылған. Әбйәлил предприятиеһының продукцияһы фитосанитар нормаларға тулыһынса тап килә, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан буйынса Россельхознадзорҙан.** 2022 йыл уңышы өсөн республикала 55 мең гектар етен сәселгән, башлыса Урал аръяғында - Хәйбулла, Баймаҡ, Әбйәлил районадарында. Етен - талымһыҙ культура, Башҡортостанда ул тукыу сеймалы түгел, ә май бирә торған культура булараҡ үҫтерелә. Етен орлоҡтары сәләмәт туҡланыуҙа әүҙем ҡулланыла, уларҙан етен майы, урбеч, аҙыҡ өҫтәмәләре яһайҙар. Етен ҡалдығы - малсылыҡ өсөн ҡиммәтле мал аҙығы өҫтәмәһе. Былтыр республикала май бирә торған культураларға бөтәһе 425,5 мең гектар бүленгән. Етендән тыш, Башҡортостан аграрийҙары көнбағыш (был культураға 300 мең гектар самаһы тура килә), шулай уҡ соя һәм шипкән үҫтереп алған.

✓ **Стәрлебаш районының "Үҙебеҙҙекеләр өсөн тегәбеҙ" оҫтаханаһында, хәрбиҙәрҙең үтенесе буйынса, легендар дивизия командиры Миңлегәле Шаймуратовтыҡы кеүек папаха тегә башлағандар.** Проекттың кураторы Эльвира Хәмиҙуллина һөйләүенсә, был идеяны оҫтахана ирекмәндәренең береһе Илнара Дәүләтшина тәҡдим иткән. Әйткәндәй, уның ире һәм бер туған ағаһы өлөшләтә мобилизацияға эләккән. Оҫтабикәләргә кәрәкле материалдар - тире, эслек өсөн туҡыма менән ауылдаштары ярҙам иткән. Күмәкләп бер нисә папаха тегеп, тыуған яғына ялға ҡайтҡан ике яугирға бүләк иткәндәр. "Кире бәйләнеш бар, күптәр ошондай бүләк тураһында хыялланған икән, бик ҡыуандыҡ. Шуға күрә киләсәктә, мөмкинлек булһа, шундай баш кейемдәре тегербеҙ, тибеҙ", - ти Эльвира Хәмиҙуллина.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘ...

**Башҡорт телен үҫтереү буйынса үткәрелгән сараларҙы финанслауҙы арттырып, 6,3 миллион һумға тиклем еткереү күҙаллана. Был турала Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров үҙ сәхифәһендә яҙҙы.**



"Хөкүмәт ултырыштарының береһендә мин Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фондына Башҡортостан Республикаһы бюджетынан 1,2 миллион суммаһындағы өҫтәмә финанслау тураһындағы тәҡдимде хупланым. Киләһе йылдарҙа ул 6,3 миллионға тиклем етәсәк.

2019 йылдан алып республикала һәм унан ситтә башҡорт телен үҫтереү өсөн күп эштәр башҡарылған. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының төбәк-ара форумын, I Бөтөн Рәсәй съезын үткәреү, башҡорт телен тәрәнәйтеп өйрәнгән полилингваль мәктәптәр селтәрен булдырыу, төбәктә дәүләт һәм туған телдәрҙе һаҡлауға йүнәлтелгән дәүләт программаһы һәм Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранты ошолар рәтенә инә. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә балалар һәм өлкәндәр өсөн тиҫтәләгән мобиль ҡушымталар, интерактив видеодәрестәр, мультимедиа һәм интерактив технологиялар өсөн программалар булдырылған. Башҡортостан Хөкүмәтендә, урындағы үҙидара органдарында үткән йыйылыштарҙа башҡортса сығыштар була, башҡорт теле көнө уҙғарыла. Әммә донъя үҙгәрә һәм беҙ бөгөн туған телдәрҙе яңы форматта ҡулланырға тейешбеҙ. Автоматик синхрон тәржемәсе башҡорт телендәге телмәрҙе башҡа телдәргә тәржемә итһен. Һәр кеше интернетта туған телендә мәғлүмәт тапһын өсөн беҙгә был йүнәлештә эште арттырырға кәрәк - донъяла барған ваҡиғаларға ҡарамайынса, артабан да үҙ мәҙәниәтебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы, тарихыбыҙҙы, туған телебеҙҙе үҫтерергә тейешбеҙ".

# УЛАР ЯРҘАМҒА МОХТАЖ

**Быйыл республика ҡаҙнаһында махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә социаль ярҙам күрһәтеү өсөн яҡынса 1,5 миллиард һум ҡаралған. Был хаҡта Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының пленар ултырышында республика вице-премьеры - финанс министры Лира Иғтисамова хәбәр итте.**

Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә социаль ярҙам буйынса сараларҙың күбеһе мәғариф өлкәһенә ҡағыла. Вице-премьер әйтеүенсә, балаларға һәм үҫмерҙәргә ярҙам итеүгә айырыуса ҙур иғтибар бүленә. 2023 йылдың ғинуар башына 2,6 меңдән ашыу бала баҡсаға бушлай йөрөй. Бынан тыш, 5-11 кластарҙа белем алған 2,2 мең уҡыусы һәм колледждарҙың 500-ҙән ашыу студенты бушлай ҡайнар аш менән тәьмин ителгән. Шулай уҡ уҡыусылар һәм 23 йәшкә тиклемге студенттар ҡала йәмәғәт транспортында бушлай йөрөй ала. Бөгөнгә 3,1 мең кеше ошо хоҡуҡтан файҙаланған да инде. 1178 бала түнәрәктәрҙә бушлай шөғөлләнә. Бер үк ваҡытта 136 бала - республиканың ҡала ситендәге лагерҙарына, 91 бала - шифахана-курорт учреждениеларына юллама, ә 50 кеше республика колледждарына белем биреү сертификаттары алған. Йәмғеһе 3976 кешегә медицина ярҙамы күрһәтелгән.Үҙ ихтыяжы өсөн ағас алыу-һатыу килешеүе буйынса 161 ғаилә льготалы ставка буйынса өйҙәрҙе йылытыу өсөн ағас алған. 2023 йылдың 1 ғинуарынан ғаиләләр һәр типтағы бер транспорт сараһына 2022 йыл өсөн транспорт һалымын түләмәй.

Социаль ярҙам күрһәтеү йәһәтенән махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаилә ағзаларынан социаль ярҙам тәғәйенләү тураһында 4 368 ғариза алынған. Шуларҙың 314-е буйынса ыңғай ҡарарҙар ҡабул ителгән. Бынан тыш, 8 мең кеше ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү буйынса коммуналь хеҙмәткә түләүҙән азат ителгән. Вице-премьер билдәләүенсә, махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләренә консультация биреү һәм психологик ярҙам күрһәтеү мөһим эш булып тора. "Ғаилә" үҙәктәре белгестәре төрлө ярҙам сараларын күрһәтеү мәсьәләләре буйынса 2976 консультация биргән, бер меңгә яҡын ғаиләгә психологик ярҙам күрһәтелгән.

# ЯЛҒАН МӘҒЛҮМӘТ ТАРАТМА

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров терроризмға ҡаршы төбәк комиссияһының сираттағы ултырышын үткәрҙе. Көн тәртибендә төбәктә хоҡуҡ тәртибен һәм хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә йоғонто яһаусы социаль-иҡтисади факторҙарҙы кҫәтеү мәсьәләләре, шулай уҡ Башҡортостанға килгән Донбасс, Запорожье һәм Херсон өлкәләрендә йәшәүселәр менән мәғлүмәт эше ҡаралды.**

"Идеологик, мәғлүмәт һуғышы бөгөн иң мөһим мәсьәләләрҙең береһе. Ҡаршы яҡ үҙҙәренең пропагандаһын алып барыу, ялған, дошмандарса мәғлүмәт таратыу өсөн теләһә ниндәй алымдар ҡуллана, бигерәк тә йәштәр араһында", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Хәүефте иҫкәртеү йәһәтенән уйланылған ҡарарҙар ҡабул итеү, әүҙем эш итеү мөһим".

Ултырышта ҡатнашыусылар 2023 йылға билдәләнгән эштең төп бурыстарын тикшерҙе. Улар араһында - социаль һәм инфраструктура объекттарын террористарҙан һаҡлауҙы даими анализлау, терроризм идеологияһына ҡаршы тороу, милләт һәм конфессия-ара низағтарҙы булдырмау һәм иҫкәртеү, йәштәр араһында әүҙем граждандыҡ позицияһын булдырыу.

"Башинформ" бығаа тиклем фейктар таратыуҙың эҙемтәләре, Башҡортостан халҡының интернет селтәрендә ялғандан нисек һаҡланырға икәнлеге тураһында хәбәр иткәйне. Раҫланмаған яңылыҡтарҙы социаль селтәрҙә урынлаштырыу еңейт эше, шулай уҡ әхләҡи зыяны ҡаплау буйынса граждандыҡ эше асыуға килтереүе мөмкин икәне лә билдәләнгәйне. Йәғни, селтәрҙә граждандар һаулығына, ғүмеренә, мөлкәтенә, йәмәғәт тәртибен һаҡлауға, йәшәйеш өсөн кәрәкле объекттар, транспорт, сәнәғәт, социаль инфраструктураға һәм башҡаларға хәүеф янаған хәбәр таратҡан өсөн РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында Кодекстың 13.15-се статьяһы 9-сы өлөшөнә ярашлы административ яуаплылыҡ ҡаралған. Был осраҡта граждандыҡ 30-ҙан 100 мең һумға тиклем штраф көтә.

Суд статистикаһы мәғлүмәттәре буйынса, 2022 йылдың беренсе яртыһында был статья буйынса 71 кеше яҙаға тарттырылған, һалынған штрафтарҙың дөйөм суммаһы 4 миллион һум самаһы тәшкил иткән.

# Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң Совет майҙанында бер нисә автобус менән махсус хәрби операция зонаһынан ялға ҡайтҡан яҡташтарыбыҙҙы ҡаршыланылар. Башҡортостан Башлығының республика хәрбиҙәре менән хеҙмәттәшлек мәсьәләләре буйынса кәңәшсеһе Алик Камалетдинов һүҙҙәренсә, яҡташтарыбыҙҙы өйҙәренә алып ҡайтҡан автобустар Башҡортостан Башлығы ҡушыуы буйынса бүленгән. Бынан алда "Башинформ" 28 ғинуарҙа Өфөнән бер төркөм яугирҙарҙың ҡыҫҡа ваҡытлы ялдан һуң махсус хәрби операция зонаһына юлланыуы хаҡында хәбәр иткәйне.

✓Өфөнөң "Рәсәй - минең тарихым" тарихи паркында Сталинград һуғышының 80 йыллығына арналған мультимедиалы күргәҙмә асылды. Тарих тамашасыларға хронология тәртибендә тәҡдим ителә: "Һауа блокадаһы", "Сталинград алышы", "Кышҡы йәшен" операцияһы, "Тацинск рейды", "Кулса", "Сталинградтың төньяҡ районадары өсөн алыштар", "Мамаев ҡурғаны", "Павлов йорто". Белешмә алыу һәм экскурсияға яҙылыу өсөн телефон: (347)286-60-66.

✓Хәҙерге көндә "Өфө" халыҡ-ара аэропортынан тура рейстар менән туғыҙ илгә: Төркиәгә, Таиландҡа, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә, Әзербайжанға, Әрмәнстанға, Ҡаҙағстанға, Ҡырғыҙстанға, Тажикстанға һәм Үзбәкстанға осорға мөмкин. Башҡортостандың Роспотребнадзор идаралығында белдереүҙәренсә, осош алдынан шул илдәге эпидемиологик хәл менән ҡыҙыҡһынырға кәрәк. Турфирма аша билет һатып алғанда унда клиенттарға ошо мәғлүмәтте еткерергә тейештәр.

✓17 февралдән Башҡортостандан Үзбәкстанға тура авиарейс асыла, тип хәбәр итте республика етәксеһе Радий Хәбиров социаль селтәрҙә. "Өфө - Сәмәрҡәнд" авиаосоштары аҙнаһына бер тапҡыр, йома көндө башҡарыла, ә юлға өс сәғәт ваҡыт китә. Шулай уҡ 1 февралдән Рәсәйҙән Ҡаҙағстандың Астана, Алматы һәм Атырау ҡалаларына даими маршруттар тергеҙелде.

✓2 февралдән Өфөнән Мысырға, Ҡыҙыл диңгеҙҙең иң популяр курорттарының береһе Шарм-эль-Шейхҡа, авиарейс асылды. Өфө аэропортының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, рейстар аҙнаһына ике тапҡыр: дүшәмбе һәм кесаҙна көндәрендә 202 урынлыҡ Airbus A-321самолеттарында башҡарыла. Юлға 4 сәғәт 50 минут ваҡыт китә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Ҡалала юл ситендәге кәртәләр кәрәкме, тигән һорауҙар ҙа күп яңғырай. Кәрәк, улар кеше ғүмерен һаҡлай. Әйткәндәй, йәштәр кәртә аша һикереп, рөхсәт ителмәгән ерҙән сыға, әлбиттә. Ә оло кеше - юҡ.*



ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА

**Башҡортостан юлдарында үлем осрағы менән бәйле хәл-торош нисек, иҫерек килеш рулгә ултырыусылар менән көрәштә кем еңә, юл эргәһендәге кәртәләр кеше ғүмерен ҡотҡарамы - республиканың баш дәүләт автоинспекторы Владимир СЕВАСТЬЯНОВ ошо һәм башҡа һорауҙарға асыҡлыҡ индерҙе. Ҡыҫҡаса - уның яуаптары.**

# КЕШЕ ҒҮМЕРЕ ӨСӨН КӨРӘШ



● 2021 йылдан федераль юлдарға камера ҡуйыла башланы. Был сара ыңғай һөҙөмтә бирҙе - былтыр федераль автомобиль юлдарында ҡурҡыныс авария аҙыраҡ булды, һәләк булыусылар һаны ла кәмене. Даими рәүештә яңы юл билдәләре ҡуйыла, техник саралар, инженер алымдар - былар бөтәһе лә үлем осрағын бөтөрөүгә йүнәлтелгән. Статистик мәғлүмәттәргә килгәндә, республикала былтыр юл транспорты ваҡиғаһы - 8,3, вафат булыусылар - 14,4, йәрәхәтләнеүселәр 8,4 процентҡа кәмегән.

● Дәүләт автоинспекцияһы аҙна һайын рейд үткәрә. Улар араһында "Штраф", "Бурыслы", "Йәйәүле", "Игтибар - балалар!", "Мотоцикл" тип аталған махсус операциялар бар. Юлда беҙҙең хеҙмәткәр тороуы рулдәгеләргә ныҡ тәьҫир итә. Нисек кенә булмаһын, был водителдәрҙең тәртибенә ыңғай йоғонто яһай. Элегерәк юлда ЮХХДИ машинаһы муляждары тора ине. Хәҙер улар күп түгел. Быйыл шериф-балка ҡуя башланыҡ. Ғәҙәттә, уларҙы сигнал әлләҡайҙан күренеп торһон өсөн йәйәүлеләр үтә торған урынға бағанаға ҡуялар.

● 2022 йылда пропаганда эше алып барыу, киң мәғлүмәт сараларында яҡтыртыу һәм иҫерек водителдәрҙе тотоу сәбәпле эскән килеш юл һәләкәтенә осрау ваҡиғалары 15 процентҡа кәметтек. Был проблеманың Хөкүмәт кимәлендә хәл ителеүе, ҙур штраф та, таныҡлыҡтан мәхрүм итеүҙә ыңғай һөҙөмтә бирҙе. Иҫерек килеш руль артына ултырған 12 меңдән ашыу водитель теркәлде. Эскән килеш күберәк 35-тән 50 йәшкә тиклемгеләр руль артына ултыра. Ҙур һәләкәткә килтергән аварияларҙа йышыраҡ эшһеҙ граждандар сәбәпсе. Лайыҡлы эш урыны, ғаиләһе, балалары булғандар тотанаҡлыраҡ.

● Өфөлә йәйәүлеләрҙе бәрҙереү осрағы күп. Тәғәрмәс аҫтына йышыраҡ 60 йәштән өлкәнерәктәр эләгә. Улар юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙмаҫҡа өйрәнә алмаясаҡ инде хәҙер: тыҡрыҡҡа килеп етмәйҙәр, автомобиль йөрөгән яҡтан атлайҙар, үҙҙәренә уңайлы булған урындан сығалар. Йөрөтөү сифаты, йәғни менталитет та ҙур роль уйнай. Йыш ҡына авария урынын ташлап ҡасып китеү осрағы ҡүҙәтелә, әммә уларҙы табырға видеокамералар ярҙам итә.

● Өфөлә 3-сө, 39-сы гимназиялар, 1-се лицей эргәһендә тығындар йыш була. Һәр ғаиләлә кәм тигәндә бер машина, хатта дүртәр транспорт бар. Күптәр баланы машина менән килтереләр һәм хәүефһеҙлек маҡсатында уны ҡапҡа янында ҡалдырырға тырышалар. Унда ЮХХДИ хеҙмәткәрен ҡуйыу менән проблема хәл ителмәйәсәк. Һәр мәктәп янында дежур итеү мөмкинлеге лә юҡ. Тўләүле парковкалар индерергә кәрәк, тигән тәҡдимдәр бар. Тик был мәсьәләне ҡала хакимиәте хәл итергә тейеш.

● Йәй көнө Өфөнөң ҡайһы бер тыҡрыҡтарына "шаҡмаҡ билдәләр" ҡуйылғайны. Был инженер сараһы түгел, ә водителгә тәртип һаҡлау өсөн кәрәк һәм рулдә ултырыусыны унға йәки һулға боролғанда йәйәүлене үткәреү тураһында иҫкәртә. Тиҙҙән бындай тамғалар һаны артасаҡ. Яңылыҡтарҙан - Өфөлә бер нисә юл участкаһында,а Пушкин урамында, 3-сө гимназия янында светофор режимын өс фазалыға алмаштырҙыҡ. Тәжрибәнән күренеүенсә, юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге сиктәрендә был яңылыҡ ыңғай һөҙөмтә күрһәтте.

● Өфөлә юл йөрөүселәр өсөн иң хәүефһеҙ урын - Салауат Юлаев проспекты. Иң хәүефлеһе - Октябрь проспекты, Жуков - Бикбай тыҡрыҡы. Ҡалала юл ситендәге кәртәләр кәрәкме, тигән һорауҙар ҙа күп яңғырай. Кәрәк, улар кеше ғүмерен һаҡлай. Әйткәндәй, йәштәр кәртә аша һикереп, рөхсәт ителмәгән ерҙән сыға, әлбиттә. Ә оло кеше - юҡ, уға светофорға тиклем барырға кәрәк була. Был иһә уны бәхетһеҙлек осрағынан һаҡлап алып ҡала.

ҠЫҪҠАСА

# БЛОКАДАЛА БУЛҒАНДАР

**Әлеге ваҡытта Өфөлә блокадалы Ленинградтан күсеп килгән 42 кеше йәшәй. Был турала баш ҡала мэры Ратмир Мәүлиев социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте.** Ул ошо мәхшәрҙең шаһиты булған Рәзиә Вәлишинаның өйөнә барған. Мәүлиев һүҙҙәренсә, инәй үҙенең күргән михнәттәре - аслыҡ, бомбаға тотоу, яҡындарыңды мәңгелеккә юғалтыуҙан ҡурҡыу тураһында күҙ йәштәре аша әсенеп һөйләгән. "Уның ғаиләһе Өфөгә 1942 йылдың яҙында эвакуацияланған. Рәзиә Кәрим ҡыҙы ғүмере буйына производствола, тәүҙә Черниковкалағы хәрби заводта, һуңынан 20 йылдан ашыу Өфө фанера комбинатында эшләгән. Тормош иптәше менән өс бала тәрбиәләп үҫтергәндәр", - тип яҙҙы баш ҡала хакимиәте башлығы. Әйткәндәй, 27 ғинуар - Ленинградты фашист блокадаһынан тулыһынса азат итеү көнө билдәләнде. Башҡортостанда блокада ҡамауының өҙөлөүенә 80 йыл тулыуға арналған саралар уҙҙы.

✓ **Башҡортостанда ғалимдар махсус разведка өсөн пилотһыҙ осоу аппаратының прототибын уйлап тапҡан.** Һүҙ Өфө фән һәм технологиялар университетының алдынғы инженер мәктәбе асышы хаҡында бара. Әлеге ваҡытта аппарат функциональ һынау үтә, шунан һуң һынап ҡарау өсөн хәрбиҙәргә тапшырыла. Һынау уңышлы үткән осраҡта республикала ошондай аппараттарҙы сериялы сығарыуҙы яйға һалыу күҙаллана. Башҡортостан ғалимдары уйлап сығарған пилотһыҙ осоу аппаратының оҙонлоғо - 300 миллиметр, ауырлығы - 155 грамм. 1,5 саҡрым алыҫлыҡҡа осорға мөмкин, осоу ваҡыты - 15 минутҡа тиклем. Пилотһыҙ осоу аппараты яҡынса 25-120 мең һум тора. Бынан алдараҡ Башҡортостанда пилотһыҙ аппараттар етештереү өсөн грант программаһының башланыуы хаҡында хәбәр ителгәйне.

✓ **Башҡортостанда йәшәүселәр махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға посылка ебәреп тора.** Миңлегәле Шайморатов исемендәге ирекмәндәр штабында белдереүҙәренсә, хәрбиҙәрҙең яҡындары посылканы "Берҙәм Рәсәй" партияһының урындағы бүлексәләренә килтерергә мөмкин. Бындай бүлексәләр республиканың һәр ҡалаһында һәм районында эшләй. Посылка әҙерләгәндә тәҡдим ителгән әйберҙәр исемлегенә иғтибар итергә кәрәк. Иң тәүҙә эске кейем, термокейем, шәхси гигиена әйберҙәре, олтораҡтар, батарейкалар, быҡтырылған ит, балыҡ консервалары, кәнфит, ҡуйыртылған һөт, тәмәке, шәкәр, шоколад, сәй, кофе. Посылкаға шулай уҡ оҙаҡ һаҡланыусы аҙыҡ-түлек, медицина препараттары, хаттар, өҫ һәм аяҡ кейеме һалырға мөмкин. Алкоголь, наркотик, аҡса, осло предметтар, ҡорал ҡатғи тыйыла.

✓ **Быйыл Өфөлә Спорт көрәше үҙәге һалына башлаған кварталда ике яңы урам барлыҡҡа киләсәк. Эштәр "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проекты сиктәрендә финансланa.** Был хаҡта социаль селтәрҙә Өфө мэры Ратмир Мәүлиев хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, ике урамдың дөйөм оҙонлоғо - бер саҡрымға яҡын. Урам ситтәрендә парковкалар һәм тротуарҙар төҙөлә. Юлдар һалыуҙы 2024 йылда, Өфөнөң 450 йыллығына тамамлау планлаштырыла. Баш ҡала мэры Октябрь проспектында урынлашҡан "Ҡурай тотҡан малай" фонтаны тирәләй майҙанды ("Искра" кинотеатры алдында) төҙөкләндереү тураһында ла хәбәр итте.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ӘЙҘӘГЕҘ, БӘЙГЕГӘ!

**Өфөлә 8 февралдә "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе - 2023" республика конкурсының төбәк этабы уҙғарыла.**

Ул әхлаҡи-эстетик мәҙәниәт нигеҙҙәрен булдырыу, башҡорт фольклорын һаҡлау һәм үҫтереү, ғаилә ҡиммәттәрен популярлаштырыу маҡсатында ойошторолa. Проекта Башҡортостандан һәм Рәсәйҙең башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәренән башҡорт телендә һөйләшкән бөтә ғаиләләр ҙә ҡатнаша ала, йәш сикләнмәй. Ғаилә видеороликтарын конкурс буйынса һайлап алыу Ҡаланың мәҙәни-ял үҙәгендә ойоштоpола. Архангел, Ауырғазы, Өфө, Дәүләкән, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Шишмә районданран һәм Өфө ҡалаһынан килгән ғаризалар 6 февралгә хәтлем Himik_DK@mail.ru электрон почтаһына ҡабул ителә. Төбәк этабының конкурс эштәре "Ғаиләнең визит карточкаһы" (видеоролик йәки презентация); "Ғаилә ырыуы тарихы" ( "Шәжәрә" менән таныштырыу); "Ғаилә байрамы" (ижади конкурс) кеүек өлөштәрҙән тора.

## АУЫЛ СПОРТЫН ҮҪТЕР!

**Башҡортостанда уҡытыусыларҙың "Ауыл тренеры" программаһында ҡатнашыу мөмкинлеге бар.**

Был программа буйынса бер тапҡыр бирелә торған компенсация нормалары тураһында ҡарарға үҙгәрештәр индерелде. Үҙгәрештәр башлыса "тренер" һүҙен "тренер-уҡытыусы"ға алмаштырыуға ҡағыла. Тимәк, хәҙер тренер ғына түгел, белем биреү учреждениеһында эшләгән педагогик хеҙмәткәр ҙә ошо түләүҙе алырға хоҡуҡлы. 2023 йылда Башҡортостанда ауыл тренерҙарына түләүҙәр 1 миллион һумға еткерелә, тип хәбәр ителгәйне. Республика Хөкүмәте муниципалитеттарға был ҡаҙнаһынан финанс бүлеү тәртибенә тейешле үҙгәрештәр индерҙе. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров физкультура һәм спорт буйынса республика советы ултырышында тағы бер тапҡыр ошо хаҡта иҫкә төшөрҙө.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Арҡа һыҙлаһа

❖ Арҡа һәм быуындар һыҙлағанда өй шарттарында әҙерләнгән май ярҙам итә. Уны эшләү өсөн 3 тауыҡ йомортҡаһы, 100-әр грамм ҡаҙ майы, арыш оно, бал кәрәк. Барыһын да бергә ҡушып болғап, ауыҙы ябылған һауытҡа һалырға. Был майҙы һыуытҡыста һаҡларға. Көнөнә ике тапҡыр һыҙлаған ергә һөртөргә һәм йылы урарға.

❖ Шулай уҡ андыҙ ҙа ярҙам итә. Уның тамырын йыуырға, һыуы кипкәс, бутҡа итеп иҙергә. Шуны һыҙлаған быуынға һалырға. Әммә 2-3 сәғәттән артыҡ тотмаҫҡа, сөнки ул тирене яндырырға мөмкин.

### Бауыр

❖ Йәбешкәк (репешок обыкновенный) бауыр күҙәнәктәре эшмәкәрлеген яҡшырта, матдәләр алышыныуын яйға һала, вирустарға һәм микробтарға ҡаршы, ҡанауҙы туҡтатыу һәм үт ҡыуҙырыу сифаттарына эйә. Шуға күрә бауыр ауырыуҙарынан йәбешкәкте ҡулланырға мөмкин. Ваҡланған үләндең 1 ҡалағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм талғын утта ҡайнар хәлгә еткерергә. 1 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм көнөнә 4 тапҡыр яртышар стакан эсергә.

### Йөрәк

❖ Йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙарын иҫкәртеү маҡсатында йылына ике тапҡыр түбәндәге эсыл менән дауаланырға була. Уртаса ҙурлыҡтағы 3 лимонды йыуып, ышҡып һөртөргә һәм таҙартылмаған (нерафинированный) көнбағыш майын тышына һыларға. Шулай уҡ 200-шәр грамм әстерхан сәтләүеге, йөҙөм, көрәгә, ҡара емеш (чернослив), 250 грамм бал, дарыуханан алынған 1-әр һауыт гөлйемеш сиробы һәм энәлек төнәтмәһе кәрәк була. Кипкән емештәрҙе ит турағыста ваҡларға, бал ҡушырға, гөлйемеш сиробы һәм энәлек төнәтмәһен өҫтәргә. Барыһын да яҡшылап бутарға һәм ҡара быялалы банкаларға һалырға. Ундай һауыт булмаһа, аҡ быяла һауытҡа һалып, тышынан фольга менән урап ҡуйырға ла ярай. Дауаны һыуытҡыста һаҡларға. 10 көндән һуң ҡуллана башларға мөмкин. Уны көнөнә 1 тапҡыр ас ҡарынға 1-әр ҡалаҡ ашарға кәрәк. Ошо рәүешле көҙөн һәм яҙын һауыҡты нығытыу файҙалы.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

### Хәситә, әмәйҙек, дәүәт



С.Н. Шитованың "Башҡорт халыҡ кейеме" китабында Әлшәй районының Буранғол ауылында төшөрөп алынған дәүәттең фотоһы бирелә.

Ә бына төньяҡ-көнбайыштағы гәйнә башҡорттарында муйынсаның нигеҙе (ғалим был төбәктә дәүәтте шулай тип атауҙарын һыҙыҡ өҫтөнә ала) 5-6 см киңлегендәге уҡанан тора. Уның өҫтөнән эре көмөш тәңкәләр тегелә. Ғалимдың яҙмаһында муйынса һүҙенең ҡулланылыуы осраҡлы түгел, сөнки башҡорт теленең һөйләштәрендә башҡа төр атамаларҙы ла осратабыҙ: кесәбикә (һаҡмар) - кесәбикә тейләр түшкә ҡыйа кейәр өсөн теккәнен; ҡыйа иҙеү (ҡыҙыл, мейәс); муйынса (дим, урта); муйын тәңкәһе (ҡыҙыл); теркәмә (дим, урта); хәйкә (төньяҡ-көнбайыш). Башҡорт ҡатынҡыҙҙарының һул инбаштан уң ҡултыҡ аҫтына төшөрөп түшкә ҡырын кейеп йөрөгән биҙәүестәренең, үкенескә күрә, хәҙерге көнгәсә килеп еткән боронғо өлгөләре юҡ тиерлек. Әммә берәһе Башҡортостан Республикаһының Милли музейында һаҡлана. Фондта ул ғәрәп һүҙе "дәүәт" атамаһы аҫтында теркәлгән.



Хәтергә төшөрөп китәйек, был һүҙ Краснокама, Илеш, Дүртөйлө, Баҡалы, Саҡмағош, Бүздәк, Туймазы, Благовар, Шишмә, Дәүләкән, Бәләбәй, Бүздәк, Ауырғазы, Архангел, Әлшәй, Йәрмәкәй, Миәкә, Ғафури, Бишбүләк, Стәрлебаш, Ишембай райондарында һәм Ырымбур өлкәһендә теркәлгән. Өҫтәп шуны әйтергә кәрәк: Архангел, Белорет, Әлшәй, Ауырғазы, Стәрлетамаҡ һәм Хәйбулла районларында был атаманың "тәүәт" фонетик варианты бар.

Был биҙәүестең тарихы Бишбүләк районына барып тоташа. Ул музейға 1972 йылда тапшырылған. Үҙенсәлектәренә килгәндә шуны әйтергә мөмкин: дөйөм ауырлығы - 916 грамм. Нигеҙе - оҙонлоғо 535 мм, киңлеге 95 мм тәшкил иткән киндер туҡыма. Алғы яғынан ҡара төҫтәге туҡыма менән тышланған. Ярымтүңәрәк формаһында булһын өсөн 3 урындан бөрөп тегелгән. Нигеҙҙең ике осон тоташтырып тороусы күк төҫтәге таҫма һары төҫтәге туҡыма менән ялғанған. Күрәһең, шул ысул менән оҙонайтҡандар. Тағы ла тарыраҡ таҫма иһә, уң инбаш аша һалынып, биҙәүесте тотоп тора.



**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

ЙЫЛ ЗЫҢҒЫРЫ

# ДУҪЫМ ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ



**Күңел торошомдо, фекеремде аңлай, тойған дуҫым һәм коллегам булғанға ҡыуанам. Беҙ уның менән йәш саҡтан бер юлдан, бер йүнәлештә атлайбыҙ. Икебеҙ ҙә - башҡорт теле уҡытыусылары.**

Минең әле һөйләйәсәк дуҫым - тыуған еренә, Ейәнсураһына һәм "Башҡорт теле уҡытыусыһы" тигән иң изге һөнәргә тоғро Наил Юлдашбаев ул. Тормоштоң йырып сыҡҡыһыҙ уйҙар теҙмәһе, йәшәйештәге киҫкен һорауҙар тыуған мәлдә яуапты бергәләп эҙләйбеҙ, табабыҙ, таба алмайбыҙ, табып та юғалтабыҙ...

Дуҫым - күп һәләттәргә эйә ижади шәхес: педагог, психолог, гитарасы, телсе-ғалим, балыҡсы... "Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух" тигән йәшәү ҡануниәтен үҙ иткән, беҙҙе лә шуға саҡыра: бассейнда йөҙә, ауыр физик күнекмәләр эшләй, һалҡын тейеүҙән, төрлө ауырыуҙарға, йоғошло сирҙәргә ҡаршы көрәшеү буйынса ла үҙ алымдары бар. Иң мөһиме, яҡшы кәңәшсе. Уны барыһы ла хөрмәт итә, барыһы ла унан кәңәш һорай... Шундай көслө рухлы ир-егеттәребеҙ булғанда ғына йәмғиәтебеҙ алға барасаҡ, төрлө ығы-зығыларҙы ла еңелерәк үткәрәсәк, тигән ҡыуаныс бар күңелдә. Иң мөһиме, мәктәптәрҙә Наил Юлдашбаев кеүек ир-егет уҡытыусылар күберәк булһын ине. Ул бит күпме йәш кешене туған башҡорт телен ҡәҙерләргә өйрәтте, уны йәшәтеү, үҙ балаларына тапшырыу мөһимлеген ҡандарына, аңдарына һеңдерҙе...

...Бына "Йыл уҡытыусыһы" конкурсы йәнә беҙҙе осраштырҙы. Ҡыуанып, уның урам буйлап атлап килеүен күҙәтеп, көтөп торам. Уның мыйыҡ аҫтынан ғына йылмая биреп, ашыҡмай, ышаныслы, сайҡала биреп атлап килеүен алыҫтан таныйым - берәү ҙә улай атламаҫ! Шунан инде башлана ҡыҙыҡлы хәтирәләрҙе яңыртыу, фекер алышыуҙар.

Һөйләшеп туймаған ошондай бер мәлдә ҡапыл ғына унан: "Ниндәй кешеләрҙе ихтирам итәһең?" - тип һорай ҡуйҙым. Уның яуабы шулай булды:

- Мин үҙ юлын тапҡан һәм шул юлдан алға барған, ынтылған кешеләрҙе ихтирам итәм. Шулай уҡ намыҫлы һәм гүзәл булғандарға, тағы ла ауырлыҡтарҙы еңеп, үҙ маҡсаттарына өлгәшкән кешеләргә, йығылып та, баш эймәй, ҡаушап ҡалмай, ҡабаттан күтәрелгәндәргә ихтирам менән ҡарайым. Әйтергә кәрәк, байып та, юғарыға күтәрелеп тә, кешелек сифаттарын юғалтмағандарҙы ла йүнлеләр иҫәбенә индерәм...

Тормош, йәшәйештең умыртҡа һөйәге булып, йөрәге ҡушҡанды эшләп торорға тейешмен тигән кеше, - тип тамамланы ул үҙ фекерен.

Һәм тағы "Йәмғиәттәге ниндәй күренештәр кәйефеңде ҡыра?" тип тә һорап ҡуйҙым дуҫымдан яуаптың нисегерәк яңғырарын белә тороп.

- Мин кешелек йәмғиәтендәге ялғанды яратмайым. Бер үк хаталарҙың ҡабатланыуын, ялған отчеттарҙы йәнем һөймәй, - тип яуапланы Наил дуҫым.

Бына шундай фәлсәфәләргә бирелеп, тормош тураһында, кешеләр тураһында фекер алышыр, ауыр уйҙарҙан арындырып, киләсәккә өмөт, ышанысты дәрләтеп ебәрер дуҫтарың булыуы ҡалай яҡшы, шулай бит. Әйҙәгеҙ, шундай дуҫтарыбыҙҙы ишәйтәйек. Шундай уҡытыусылар өлгәһөн башҡалар араһында таратайыҡ. Был өлгөлө уҡытыусы тураһында бик күпте һөйләп була. Мин башлап ҡына ҡуйҙым әлегә.

**Ғайса ИШМӨХӘМӘТОВ.**
**Ейәнсура районы.**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# ҠАТЫН-ҠЫҘМЫ,

## әллә ҡыҙ-ҡатынмы?

**Башҡорт телендә "катын-ҡыҙ" тигән һүҙ бар. Был һүҙҙе телселәребеҙ хәҙерге башҡорт теленән урыҫсаға "женщина" тип тәржем иткән (женщина - ҡатын, ҡатын-ҡыҙ, жена - бисә, ҡатын; девушка - ҡыҙ, еткән ҡыҙ; девушки - ҡыҙҙар, ҡыҙ-ҡырҡын).**

Башҡорттан башҡа төрки телле халыҡтарҙа "катын-ҡыҙ" тигән һүҙ үзбәктәрҙә, уйғырҙарҙа ла ҡулланыла. Әммә Алтай, Саян тауҙарында йәшәгән төрки телле халыҡтарҙа был һүҙ юҡ. Тимәк, был һүҙ боронғо төркиҙәрҙә булмағандыр, тигән уй тыуа. Әгәр ундай һүҙ булһа, Алтай, Саян тауҙарында йәшәгән боронғо төрки телле халыҡтарҙың туранантура варистарының телендә был һүҙ, моғайын да, һаҡланып ҡалыр ине.

Бынан бер нисә йыл элек яҙыусы Әхмәр Үтәбай был һүҙҙе "ҡыҙ-катын" тип яҙырға тәҡдим итте һәм үҙе шул тәртиптә яҙа ла башланы. Уға бер нисә эйәреүсе лә табылды, шикелле. Әммә, был тәртиптә яҙыу дөрөҫмө икән, тигән уй тыуғайны шул саҡта уҡ.

Мин күптән инде телебеҙҙәге төрлө ҡыҙыҡ ҡына күренештәргә иғтибар итеп, уларҙы аңларға тырышып, төрлөсә эҙләнеүҙәр алып барам. Телебеҙҙәге һәр һүҙҙең үҙ тарихы бар. Телдә халыҡтың тарихы сағыла, тип ғалимдар буштан ғына әйтмәгән бит. "Катын-ҡыҙ" һүҙе менән дә шул уҡ хәл. Иғтибарлы, уйсан кеше "катын-ҡыҙ" һүҙенең ике өлөштән - "ҡатын" һәм "ҡыҙ" тигән өлөштәрҙән торғанына иғтибар итәләр, тип уйлайым. Мин үҙем был һүҙ менән күптән ҡыҙыҡһынып, уның тарихын асыҡлаһам да төрлө сәбәптәр арҡаһында уҡыусыға тәҡдим итә алмай йөрөй инем.

Төрки һәм иран телдәрен өйрәнеүсе күренекле ғалимдар, "ҡатын" һүҙе төрки телле халыҡтарға иран телле согдтарҙан килеп ингән, тигән ҡараштa тора. Согдия тигән дәүләт хәҙерге Үзбәкстан һәм Тажикстан, өлөшләтә Афғанстан ерҙәрендә урынлашҡан булған. Был дәүләттең халҡы сауҙаға маһир булып, боронғо Ҡытай, Һиндостан, Рим, Фарсы дәүләттәре менән әүҙем бәйләнештә йәшәгән.

Ошо согдтар "ҡатын" тип үҙҙәренең батшаһының бисәһен атаған. Йәғни, тәүҙәрәк был һүҙ енесте билдәләмәгән, ә йәмғиәттәге урынды билдәләүсе һүҙ булған. Аҙағыраҡ әүҙем бәйләнештәр арҡаһында был һүҙ төркиҙәргә лә билдәле булып китә һәм улар ҙа согдтар кеүек, үҙҙәренең хандарының бисәһен "ҡатын" тип атай башлай. Һүҙ ыңғайында әйтеп китергә кәрәк: хәҙер бөтәһе лә төркиҙәрсә тип ҡабул иткән "хан" һүҙе лә килеп сығышы менән төп төрки һүҙе түгел, ә иранлыларҙан ҡабул ителгән һүҙ, тиҙәр телсе ғалимдар. "Хан" һүҙенең тамыры "ҡаған" булып, аҙағыраҡ йәйләп ҡына үҙгәреш кисереп, ул "хан" формаһында ҡалыплашып, ҡатып ҡала. Ошо формала ул төрки һүҙе, тип әйтергә була һәм тик төрки халыҡтарында ғына үҙҙәренең башлыҡтарын хан тип атау таралып, күрше-тирә халыҡтарға ла билдәле булып китә.

"Катын-ҡыҙ" һүҙенә кире әйләнеп ҡайтып, шуны әйткем килә. Был һүҙҙә "ҡатын" өлөшө "ҡыҙ" һүҙенә сифат билдәһен биреүсе булып тора. Йәғни "матур ҡыҙ" тигән кеүегерәк. Әммә был ҡыҙҙың йәмғиәттәге социаль хәлен билдәләгән һүҙ буларaҡ ҡулланыла һәм, урыҫ теле аша әйткәндә, "принцесса" тигән мәғәнәлә аңлатырға була. Күрәһегеҙ, бик тә тос, тәрән һәм матур мәғәнәле икән "катын-ҡыҙ" тигән һүҙебеҙ. Әйҙәгеҙ үҙебеҙҙең һылыуҙарыбыҙға был һүҙҙе боҙмай ғына ҡулланайыҡ. Йәғни, бер ниндәй ҙә "ҡыҙ-катын" тип түгел, ә бик боронғо замандарҙа барлыҡҡа килеп, беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып, әүҙем ҡулланылышта булғанынса, элеккесә, "катын-ҡыҙ" формаһында һаҡлайыҡ, тигән саҡырыу менән тамамлайым мәҡәләмде.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**этнограф.**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

33

# Шифа

4 - 10 февраль (шаҡай)
2023 йыл
№4 (1046)

НИҘӘР БАР?



## ФЕЛЬДШЕР ҺӨНӘРЕ АЛ!

**Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы ил Президенты ҡушыуына ярашлы, медицина белгеслектәре буйынса урта һөнәри белем биреүҙең федераль дәүләт белем биреү стандарттарын яңыртты. Эш Рәсәйҙең Һаулыҡ һаҡлау министрлығы менән берлектә алып барылды.**

Үҙгәрештәр уҡыу ваҡытына һәм урта дөйөм белем алыуға ҡарата талаптарға ҡағылды. Әйтәйек, туғыҙынсы кластан һуң колледжға уҡырға ингәндәр хәҙер "Дауалау эше" белгеслеге сиктәрендә дүрт йыл эсендә фельдшер квалификацияһын үҙләштерергә мөмкин. Элек ун беренсене тамамлағандарҙың ғына ошондай мөмкинлеге бар ине. Яңы дөйөм профессиональ дисциплиналар барлыҡҡа килде. Мәҫәлән, "Лаборатория диагностикаһы" белгеслеге "Медицина генетикаһы нигеҙҙәре булған кеше генетикаһы" дисциплинаһын үҙләштерергә мөмкинлек бирә.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

Заман талабына яуап биреп, Учалыла Белорет медицина колледжы филиалы асылды. Хәҙер мәктәпте тамамлаусылар тыуған районынан сыҡмайынса "Сестринское дело" һөнәре буйынса уҡый ала.

- Медицина филиалын асыу беҙҙең өсөн бик мөһим ваҡиға, - тип белдерҙе Учалы районы хакимиәте башлығы Руслан Ғиләжетдинов. - Медицина кадрҙары мәсьәләһенең районыбыҙ өсөн мөһим булыуын барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Әле бында урта дөйөм белем биреү нигеҙендә "Сестринское дело" һөнәре буйынса 25 студент уҡый. Быйыл 9-сы һәм 11-се класс нигеҙендә тағы 50 кешене ҡабул итербеҙ, 2024 йылда урындар һанын 125-кә тиклем арттырырбыҙ...

Билдәләнеүенсә, уҡытыу кабинеттары Учалы ҡала дауаханаһы акушерлыҡ бүлегенең беренсе ҡатында йыһазландырылды. Бинала ремонт үткәрелгән, кәрәкле уҡыу ҡорамалдары һатып алынған. Студенттар заманса тренажерҙарҙа, манекендарҙа, симуляторҙарҙа төрлө медицина манипуляцияларын үткәреү күнекмәләрен өйрәнә аласаҡ. Дөйөм белем биреү дисциплиналарын ҡаланың башҡа уҡыу йорттары уҡытыусылары, клиник дисциплиналарҙы - ҡала дауаханаһы табиптары һәм Белорет колледжы уҡытыусылары алып бара.

Республика Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, республика Башлығы Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса 2022 йылда медицина колледждарының филиалдары Нефтекамала, Октябрьскийҙа һәм Мәсәғүт ауылында ла асылған. Төбәктә бөгөн ике меңдән ашыу фельдшер-акушерлыҡ пункты иҫәпләнә. Иҫке биналарҙы этаплап алмаштырыу, яңыларын ремонтлау һәм төҙөү эштәре алып барыла. 2021 йылда "Һаулыҡ һаҡлау" милли проекты буйынса 63 медпункт төҙөлгән.

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

## ҠУРҠЫУЫН ЕҢГӘН...

### батыр булыр

**Һуңғы осорҙа донъяла барған ваҡиғалар фонында бер туҡтауһыҙ ҡурҡып, "Нимә эшләргә?", "Артабан нимә буласаҡ?" тигән һорауҙар менән үҙен яфалап, хәүефләнеп йәшәүселәр күбәйҙе. Әгәр ҙә ошондай уйҙар тоҙағына эләгә барыуығыҙҙы тойһағыҙ, нимә эшләргә? Хәүеф тойғоһоноң сәләмәтлек өсөн ниндәй кире эҙемтәләре бар? Ошолар тураһында психолог Гүзәл ТӨХВӘТУЛЛИНА кәңәштәрен тәҡдим итәбеҙ.**



Тәүҙә шуны аңлағыҙ: беҙ хәрби хәрәкәттәр, эпидемиялар, сәйәсәт, санкция мәсьәләләренә ҡағылышлы ҡарарҙарҙы үҙгәртә алмайбыҙ. Мәҫәлән, валюта курсына йәки юғары кимәлдәрҙә ҡабул ителгән үҙгәрештәргә йоғонто яһай алмайбыҙ ҙа инде, шуға ла быны ысынбарлыҡ итеп ҡабул итегеҙ һәм артыҡ көйәләнмәҫкә тырышығыҙ.

Икенсенән, төрлө яҡлап килгән мәғлүмәт йәмғиәттә бындай хәүеф тойғоһон арттырыуҙа ҙур роль уйнай. Һәр кем интернетта ултыра, яңылыҡтар уҡый, телевизор ҡарай. Әгәр ҙә һеҙҙә ҡурҡыу тыуҙырған һорау буйынса мәғлүмәтте бер туҡтауһыҙ ҡарарға күнекһәгеҙ, тимәк, хәүеф тойғоһон бер туҡтауһыҙ "ашатып" тораһығыҙ һәм уның тиҙ арала "үҫеп" китеүенә аптырарға ла түгел. Мәғлүмәтле булыу - ситуацияны ҡулда тотоу, тигәнде аңлатмай, былай тип аҡланырға тырышмағыҙ ҙа. Әгәр ҙә ниндәйҙер ғәҙәттән тыш хәл була ҡалһа, ул турала ғаилә ағзаларынан, күршеләрҙән, урамда мотлаҡ ишетәсәкһегеҙ. Унан һуң, интернетта ла, телевизорҙа ла бөтөн мәғлүмәт тә дөрөҫ тигән ышаныс юҡ.

Хәүеф тойғоһо, ғәҙәттә, "әгәр ҙә шулай булһа..." тигән уйҙарҙан барлыҡҡа килә. Әгәр ҙә иремде, туғанымды алып китһәләр? Әгәр ҙә был ҡурҡыныс беҙҙең ҡалаға-ауылға килеп етһә? Ошондайыраҡ уйҙар кисергән кешенең яурындары, күкрәге, ҡабырғалары ҡыҫыла, йөрәге тулай башлай. Бына ошо саҡта ҡурҡыу тыуҙырған ваҡиғаны аҙағына тиклем уйлап бөтөрөп ҡуйығыҙ. Шулай-шулай була ҡалһа, нимә эшләйәсәкмен, тигән һорауға яуап тапһағыҙ, был ҡурҡыу башҡа ҡабатланмаясаҡ та, сөнки уның урынһыҙ икәнен аңлаясаҡһығыҙ. Әммә бындай кешеләр, нимә уйлайһың, шул тормошҡа аша тип тағы ла ҡурҡа һәм артабан ошо башынан китмәй торған уйҙары дөрөҫлөккә сығып ҡуймаймы тип, яңылыҡтар эҙләргә тотона. Бик булмаһа, уйҙарҙы яҙып ҡуйырға кәрәк. Иртәгә, иртәгәнән һуң асып уҡырһығыҙ ҙа, ҡурҡыуығыҙҙың тормошҡа ашмауын аңларһығыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үлемдән, сирҙән, һуғыштан ҡурҡаһығыҙмы, балағыҙ өсөн борсолаһығыҙмы - хәүеф тойғоһо төрлө булһа ла, аң өсөн ул бер үк, бер үк механизм буйынса үҫешә. Шуға ла уны нисек тә булдырмаҫҡа кәрәк.**

**Ошо ваҡиғаға тиклем нисек йәшәгәнһегеҙ, шулай йәшәргә тырышығыҙ. Балаларығыҙға иғтибарлыраҡ булығыҙ. Күптән тотона алмай йөрөгән эштәр менән булышығыҙ. Ыңғай хистәр кисерергә, ҡыуанырға оялмағыҙ - был бик тәбиғи хәл. Һыу эсегеҙ, файҙалы ризыҡтар ашағыҙ, йоҡлағыҙ һәм хәүеф тойғоларын еңерһегеҙ.**

Ләйсән ВӘЛИЕВА
яҙып алды.

УЯН, УЙЛАН!

## ЙӘШӘРГӘ ТЕЛӘГЕҢ БАРМЫ?

### Айыҡ бул!



**"Һуңғы тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, алкоголь продукцияһының бөтөн төрҙәре: араҡы һәм башҡа көслө спиртлы иҫерткес эсемлектәр, шулай уҡ шарап, һыраны ла ҡушып, уларҙың сифатына һәм хаҡына ҡарамаҫтан, бөтәһе лә организмда яман шеш ауырыуҙары барлыҡҡа килеү менән бәйле. Алкоголь ҡулланыу күләмен арттырыу яман шеш үҫешенә килтереү хәүефе менән янай".**

РФ Һаулыҡ һаҡлау министрлығының терапия һәм дөйөм дауалау практикаһы буйынса штаттан тыш белгес Оксана Драпкина Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы (ВОЗ) мәғлүмәттәренә таянып, тағы ла ошоларҙы бәйән итә:

- Көн һайын 1-2 бокал шарап эсеү һөт биҙҙәре шешенең 6 865 осрағына сәбәпсе булыуы асыҡланды. 2-4 бокал иһә яман шеш сирҙәренең 12 303 осрағына сәбәпсе.
- Яман шеш сирҙәренән тыш, алкоголь кеше организмының бөтөн ағзалары һәм системаһына ағыулы тәьҫир итә.
- Алкоголь 200 төрлө сир һәм травмалар менән бәйле.
- Алкоголь ҡулланыу йөрәк-ҡан тамырҙары, аш һеңдереү системаһы сирҙәренең үҫешенә килтерә, психика һәм холоҡ боҙолоуға сәбәпсе булып иҫәпләнә.
- Аҙ ғына күләмдәге алкоголь дә ишемия, инсульт, йөрәк ҡыҫанлығы, ҡан баҫымы сире, кардиомиопатия һәм аритмия кеүек йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарына килтереүе ихтимал.
- Алкоголь яныу, йәрәхәтләнеүҙәр, көс ҡулланыу һәм юл-транспорт фажиғәләренең йышайыуына килтерә.
- Иҫерткес эсемлектәр аңды юғалтыу һәм ағыуланыу кеүек киҫкен хәлдәргә, иммун системаһы боҙолоуға һәм ашҡаҙан аҫты биҙенең елһенеүенә килтереүсе сәбәп.
- Алкоголь шулай уҡ хәүефле сексуаль ҡылыҡтарға, енси юл менән бирелеүсе йоғошло сирҙәргә, көтөлмәгән йөклөлөккә сәбәп.
- Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы мәғлүмәттәре буйынса, алкоголде самаһыҙ күп ҡулланыу һөҙөмтәһендә йыл һайын 3 млн кеше үлә, был бөтөн булған үлем осраҡтарының 5,3 процентын тәшкил итә.
- 20-нән 39 йәшкә тиклемге кешеләр араһындағы үлемдең 13,5 проценты алкоголь ҡулланыу һөҙөмтәһе.

Һаулыҡ һаҡлау министрлығы иҫкәртә: ноль градус - йәшәү өсөн иң яҡшы күрһәткес! Һаулығығыҙ үҙ ҡулдарығыҙҙа!

✔ *Уларҙа үҙ теләгем менән ҡатнаштым, сөнки башҡаса булдыра алмай инем. Мин медицина хеҙмәткәре һәм ярҙам кәрәк ергә барырға, үҙ бурысымды үтәргә тейешмен, шуға ла ирекмән булып киттем.*



ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

**Былтыр ул "Электрогазета" ойошторған республика конкурсы йомғаҡтары буйынса "Халыҡ шәфҡәт туташы" исеменә лайыҡ булды. Ә халыҡ һөйөүе - ул иң юғары баһа, тимәк, уны беләләр, эшен баһалайҙар, хөрмәт итәләр. Кемдер, "мин белмәйем", тиеүе мөмкин, әммә был уның абруйын һис тә кәметмәй, киреһенсә, баҫалҡылығы тураһында ғына һөйләй. Сөнки бөгөнгө әңгәмәсебеҙ үҙе тураһында бик һөйләргә яратмаһа ла, ул - Афған, икенсе Чечня һуғышын үткән медицина хеҙмәткәре, хәрби ҡаҙаныштары өсөн Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡулынан Маҡтау ҡағыҙы алған һәм хәрби наградаларға лайыҡ булған, тәүгеләрҙең береһе булып Луганск халҡына гуманитар ярҙам йыйыуҙы ойошторған һәм уны оҙатып йөрөгән кешеләрҙең береһе. Бөгөн ул Иглин районы үҙәк дауаханаһының рентген лабораторияһында шәфҡәт туташы булып эшләй.**
**Шулай итеп, бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - Роза ИСЛАМОВА.**

# УЛ ҺУҒЫШТЫ КҮРГӘН,

## ул тормоштоң ҡәҙерен белә...

**Әйҙәгеҙ, тәү ҡарашҡа ябай тойолһа ла, иң мөһим һорауҙан башлайыҡ: медик һөнәрен һайлауға нимә этәргес булды?**

- Мин бала саҡтан медицина хеҙмәткәре булырға хыялландым. Әсәйем аҡ туҡыманан ҡыҙыл тәре төшөрөлгән сумка, беләккә бәйләргә таҫма, ҡалпаҡ тегеп биргәйне. Һәр көн шуларҙы кейеп, урамға уйнарға сыға инем. Ололарҙың хәтирәһен тыңлап үҫкәнгәме, һәр саҡ һуғыш уйыны уйнай торғайныҡ. Мин "яуҙа яраланған яугирҙарға" ярҙам итәм, уларҙы дауалайым, һауыҡтырып, "яу яланына" оҙатам.

Сығышым менән Свердловск өлкәһенең Полевской ҡалаһынанмын. Һигеҙенсе синыфты тамамлағандан һуң Ирбит ҡалаһындағы медицина училищеһына, фельдшерҙар әҙерләү бүлегенә уҡырға индем. Уҡыу йортон тамамлағас, йүнәлтмә буйынса Богданович районының Байницк дауаханаһына ебәрҙеләр. Шул йылдарҙа Афғанстанда һуғыш башланып, тиҫтерҙәрем унда интернациональ бурыс үтәүгә алынды. Ағайым - хәрби офицер булараҡ, һуғыш башланыу менән шунда юлланды. Һуңынан, яраланып, контузия алып, госпиталдә дауаланып сыҡҡандан һуң, уға туғандары янына ҡайтыу форсаты әләгеп, тыуған яҡтарына ҡайтып китте. Ошо арала ул минe үҙе менән барырға өндәне. Шулай итеп, Ташкент ҡалаһындағы П.Ф. Боровский исемендәге госпиталгә барып эләктем. Барып эләктем, тип әйтеүе генә анһат, унда әләгеү еңелдән түгел ине - тәүҙә махсус әҙерлек үтәһең. Үкып алғас, эш башланым. 22-се травматология бүлексәһендә эшләнем, унда бик ауыр яралыларҙы килтерәләр ине. Һуғышҡа һау-сәләмәт киткән егеттәр аяҡһыҙ-ҡулһыҙ сыға. Әлбиттә, яраланған йөҙҙәрҙе, һынған яҙмыштарҙы күреүе бик ауыр булды, әммә ҡаушап ҡалырға, ауырлыҡҡа һынырға ярамай, сөнки һинә өмөт менән тулы ҡараштар төбәлгән, уларҙың яҙмышын нисек кенә булһа ла саҡ ҡына еңеләйтергә тырышаһың...

Күпмелер ваҡыттан һуң Афғанстанға, Ҡабул госпиталенә комсомол путевкаһы буйынса киттем.

**Һуғыштың йөҙө ҡатын-ҡыҙ йөҙө түгел, тиҙәр. Шул уҡ ваҡытта һеҙ Афғанстан, Икенсе Чечня һуғышын үткән кеше - уларҙың икеһендә лә шәфҡәт туташы булып эшләгәнһегеҙ. Был аҙым һеҙҙең аңлы рәүештә яһаған аҙымығыҙ булдымы, әллә бойороҡ үтәүме?**

- Ғөмүмән, һуғыштың ниндәй ҙә булһа йөҙө буламы икән? Һуғыш - ул һуғыш, шуға ҡарамаҫтан, үҙем ҡарар итеп, уларҙа үҙ теләгем менән ҡатнаштым, сөнки башҡаса булдыра алмай инем. Мин медицина хеҙмәткәре һәм ярҙам кәрәк ергә барырға, үҙ бурысымды үтәргә тейешмен, шуға ла ирекмән булып киттем. Медик - ул һәр ерҙә лә медик, уның өсөн бер генә маҡсат бар - медицина ярҙамына мохтаждарға ярҙам итеү.

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт булһа ла, Афғанстан менән танышыу бушҡа булманы. Чечняла һуғыш башланғас, унан тапшырылған репортаждарҙы тыныс ҡына ҡарай, хәбәрҙәрҙе тыныс ҡына тыңлай алмай инем. 1999 йылда икенсе Чечен кампанияһы башланғас, контракт буйынса хәрби хеҙмәткә барҙым. Төньяҡ Кавказдағы хәрби хәрәкәттәр осоронда минең тыныс, гуманлы профессиям бик кәрәкле булды: махсус тәғәйенләнештәге медицина отрядында рентгенлаборант булып эшләнем. Һыҙланыуҙар, ҡан, һуғыш мәхшәре көн һайын күҙ алымдан үтте. Унда Иглин район үҙәк дауаханаһында алған юғары категория һәм һөнәри белем генә ярҙам итмәй, кемдәлер йәлләргә, кемгәләр рух өҫтәргә, кемдәндер күңелен үҫтереп ебәргәргә, яралары уңалып та етмәҫтән ҡабат яу яланына ашҡынған бәгзеләрҙе туҡтатырға ла кәрәк. Яҙмыш осраштырған батырҙарҙы, ҡайһы берҙә бөтөнләй малайҙарҙы бер ваҡытта ла онотмаясаҡмын. Уларҙы онотоу мөмкин дә түгел...



**Һеҙ күпмелер ваҡыт Хәрби хәрәкәттәр ветерандарының Башҡортостан берлегенең Иглин бүлексәһен дә етәкләгәнһегеҙ, бер нисә тапҡыр Луганскиға гуманитар ярҙам алып барыуҙа ҡатнашҡанһығыҙ. Тормошоғоҙҙоң ошо мәлене лә туҡталып китәйек әле...**

- Бер ваҡыт ветерандар өйөмә килеп, минең ойошма рәйесе булыуымды һораны. Йыйылыш үткәреп, шунда мине етәксе итеп һайлап ҡуйҙылар. Йәмәғәт ойошмаһы рәйесе булыу - ул ниндәйҙер дәрәжә йәки статус түгел, ул бик-бик яуаплы эш. Һин хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусыларҙың һаның белергә, барыһын бергә туплаrға, уларҙың көнкүреше, ниндәй шарттарҙа йәшәүҙәре, ниндәй ауырыуҙары булыуы, ниндәй проблемаларға осрауы йәки теге йәки был мәсьәләне хәл иткәндә ҡаршылыҡтар тыуыуы тураһында белергә, уларҙы хәл итеүҙә ярҙам күрһәтергә, ниндәйҙер ҡайғы кисергәндә терәк булырға, ярҙам ҡулы һуҙырға тейешһең. Был вазифала мин алты йыл эшләнем. Шул тиклем арыным, сөнки рәйес бит отчеттар яҙып ҡына ултырмай, өҫтәүенә, төп эшем дә бар. Шуға тәүлек әйләнәһенә эшләргә тура килә ине. Һуңынан икенсе кешене һайлауҙарын һораным.

Донбасс халҡына гуманитар ярҙам йыйыу һәм оҙатыуҙы ла үҙ теләгем менән башланым, миңә берәү ҙә ҡушманы ла, йөкмәтмәне лә, ярҙам йыйыуҙы ойоштороуҙы һораманы ла. 2015 йылдан 2019 йылға тиклем Луганскиға, Петровскоеға 9 тапҡыр гуманитар ярҙам алып барыуҙа ҡатнаштым.



Беренсе тапҡыр барғаным һаман да күҙ алдында: 10 сәғәт ил сигендә торҙоҡ, Луганскиға килеп еткәс, әлбиттә, шок булды: өйҙәр емерек, вафат булған балаларға ҡуйылған таштар (памятниктар) бик күп. Улар унда аҙым һайын - ҡайҙа барма, ҡайҙа боролма - һәр ерҙә: мәктәп эргәһендә лә, кафе эргәһендә лә.... Шундай тойғо тыуа - әйтерһең дә, зыяратта йөрөйһөң.

Әлбиттә, беҙҙе күргәс, халыҡ бик ҡыуанды. "Ысынлап та беҙгә Башҡортостандан, башҡорттар килдеме?", - тип ҡабат-ҡабат һораштылар, сөнки унда шайморатовсылар тураһында онотмайҙар, уларҙың иҫтәлеген ҡәҙерләп һаҡлайҙар, Башҡортостанды, башҡорттарҙы яҡшы беләләр. Шуға ла беҙҙе, башҡорттарҙы, һәр көн көткәндәр, башҡорттар уларға теләһә ниндәй ваҡытта ла ярҙам итеренә, башҡорттарҙың килеренә ышанғандар.

Ул ваҡытта атыш, шартлау тауыштары туҡтаманы, әйтерһең дә, алғы һыҙыҡта йөрөйбөҙ. Хәҙер Петровскоеның М. Шайморатов исемен йөрөткән 22-се мәктәбенә ингәйнек кенә, атыш башланды. Уҡытыусылар шунда уҡ телефондарына йәбеште - бомба уларҙың йортона төшмәгәнме икәнен асыҡланы, ғаиләләренә, яҡындарына, туғандарына шылтыратып, хәл белеште. Бындай хәл-торошто бер нисек тә аңлатып булмай...

Беҙ йыйып алып барған гуманитар ярҙам мәктәптәргә, балалар баҡсаларына, балалар приюттарына, художество һәм музыка мәктәптәренә, Луганскиҙағы хәрби училищеға таратылды. Балалары һәләк булған ата-әсәләргә, тыуған ерен, тыуған өйөн һаҡлап һәләк булған һалдаттарҙың ата-әсәләренә лә барып еттек. Мәктәптәргә Яңы йылға Ҡыш бабай бүләктәре тараттыҡ. Балалар шул тиклем ҡыуана ине. Беҙҙең балалар Яңы йылға алған бүләктәренә ул тиклем ҡыуанмай, ә ундағы балаларҙың нисек ҡыуанғанын һөйләп аңлатырлыҡ түгел...

Гуманитар ярҙамды алғы һыҙыҡҡа ла алып барған ваҡыттар булды. Миңә егеттәр: "Роза апай, бәлки, һеҙ бармаҫһығыҙ?" - ти. "Нисек инде бармайым, мин бында нимә өсөн килдем һуң?" - тип яуаплайым. Беҙҙе билдәле бер урынға тиклем машинала алып баралар ҙа ҡалдыралар. Алғы һыҙыҡҡа сигареттар, кофе, сәй, быҡтырылған ит консерваларын йөкмәп, йәйәү китәбеҙ. Бик оҙаҡ, тауҙар, ташландыҡ, төпкөл урындарҙы үтеп, үҙ территорияларын үҙ көстәре менән һаҡларға тупланған ополчение егеттәре эргәһенә барып еттек. Улар бик ҡәнәғәт ҡалды. Минең медик икәнлегемде белгәс, ҡалырға өгөтләнеләр, әммә миңә эшемә ҡайтырға кәрәк ине. Ул ваҡытта хәҙерге кеүек шарттар булманы, эштән ебәрмәнләр, гуманитар ярҙам алып барыр өсөн генә мин донор булып киттем - ҡан тапшырып, көндәр йыйҙым, отпускымды бүлеп алдым.

Оҙатҡанда һәр саҡ: "Һеҙ килерһегеҙ бит, беҙҙе ташламаҫһығыҙ бит. Һеҙ барыбер киләсәкһегеҙ бит?" - тиҙәр ине. Беҙ уларға өмөт осҡонон ҡалдырып, мотлаҡ киләсәкбеҙ, тип вәғәҙә бирә инек. Һәр саҡ, гуманитар ярҙам йыйып, ҡабат барҙыҡ та барҙыҡ...

**Һеҙ ике һуғышта шәфҡәт туташы булып эшләгәнһегеҙ. Тыныс тормош һәм яу яланы - миҙалдың ике яғы. Шулай ҙа ҡайҙа эшләүе еңелерәк һәм ҡайҙа пациенттар түҙемлерәк, кешелеклерәк, мәрхәмәтлерәк?**

- Әлбиттә, тыныс тормошта медицина хеҙмәткәрҙәренә генә түгел, һәр һөнәр эйәһенә эшләүе еңелерәк. Ә һуғышта психологик яҡтан ныҡ ауыр, сөнки бая әйтеп киткәнемсә, унда ҡаты яралы, ҡулһыҙ-аяҡһыҙ пациенттар килә. Икенсе яҡтан, тыныс тормошта кешегә булған һайын яҡшыраҡ кәрәк. Улар икенсе тормошто күрмәгәс, мыжыҡҡа, түҙемһеҙгә әйләнә. Яу үткәндәр бөтөнләй икенсе, хатта уларҙың күптәре бөгөн дә үҙенә тейешле льготаларҙы, медицина хеҙмәтләндереүен юлламай, алмай, үҙенә күпте талап итмәй.

**Ысынлап та, беҙ бигерәк мыжыҡҡа әйләнгәнбеҙ, ҡайны берҙә хатта бер сәбәпһеҙгә мыжыйбыҙ, тормошто, медицинаны, табиптарҙы, ғөмүмән, бөтөн донъяны әрләйбеҙ, ҡәнәғәтһеҙ-**

*✓ Хәҙер ауылдарҙа ла сифатлы ризыҡ юҡ. Бер яҡтан ҡарағанда, ныҡ шәп йәшәйбеҙ, натураль аҙыҡ ашайбыҙ кеүек. Шул уҡ ҡалалағы кеүек магазиндар бар.*



**лек белдерәбеҙ... Ә һеҙҙең күҙлектән, бөгөн Башҡортостанда медицина ниндәй кимәлдә?**

- Мин бик ҡәнәғәт, сөнки власҡа Радий Хәбиров килгәс, дауаханаларҙа яңы ҡоралмалдар пәйҙә булды, булмағандары алынды. Беҙ хәҙер яңы, цифрлы рентгенологик аппараттар менән эшләйбеҙ. Ауыл ере өсөн был бик ҙур ярҙам һәм яңы ҡоралмалдар менән диагноз ҡуйыу, теге йәки был сир буйынса һығымта яһау ҙа күпкә еңеләште.

**Бик йыш рентген тикшереүен үтеүҙең һаулыҡҡа зыян килтереүе тураһында ла һөйләйҙәр, яҙалар. Рентген шул тиклем зыянлымы?**

- Мин эшләй башлаған йылдарҙа аппараттар ағыулы матдәләрҙе нығыраҡ бүлеп сығара, зыяны көслө ине. Әммә медицина бер урында ғына тормай бит, ул үҫә, үҙгәрә, камиллаша. Бынан 30-40 йыл элек булған медицина менән бөгөнгөһөнөң айырмаһы - ер менән күк араһы. Яңы ҡоралмалдарҙың зыяны бик юҡ.

**Һуңғы ваҡытта халыҡ медицинаһы бик ҙур популярлыҡ яулай, хатта ҡайһы берҙә табиптар ҙа уларға мөрәжәғәт итергә тәҡдим итә. Һеҙ халыҡ дауалауҙарына нисек ҡарайһығыҙ?**

- Тормошомда бер ваҡытта ла имселәр менән осрашҡаным булманы. Үҙемә килгәндә, квалификациялы медицина белгестәренә мөрәжәғәт итеүҙе хуп күрәм, сөнки улар тапшырған анализдарың, башҡа күрһәткестәр буйынса һығымта яһай.

**Медицина хеҙмәткәрҙәре тураһында шундай шаяртыу йөрөй, йәнәһе лә, улар өс төркөмгә бүленә: "Аллаһтан табип", "Аллаһ менән", "Хоҙай ҡушмаһын!" Ғәмәлдә дауалау юлын һайлаған кеше ниндәй булырға тейеш?**

- Нисек кенә тимәһендәр, табиплыҡ - ул Хоҙайҙан бирелгән һәләт булырға тейеш. Беҙҙе, пациенттарығыҙға үҙ әсәйегеҙгә, яҡын туғаныгыҙға ҡараған кеүек ҡарағыҙ, шундай уҡ йылы, хәстәрлекле мөнәсәбәт күрһәтегеҙ, тип уҡыттылар. Һәм был бик дөрөҫ тә.

**Бик йыш ниндәй йүнәлештә эшләмәһен, табип тәү сиратта кешенең күңелен дауаларға тейеш, тиҙәр, сөнки барлыҡ сирҙәр стрестан, ҡурҡыуҙан, нервыларҙан, тынысһыҙлыҡтан килеп сыға...**

- Әлбиттә, медицина хеҙмәткәре - ул иң элек психолог. Ул тәүҙә пациентты ниндәй проблемалар борсоуын аңларға, уның менән һөйләшергә, уның һорауҙарын иғтибар менән тыңларға һәм яуап бирергә тейеш. Ҡайһы берҙә хатта кешенең күңел торошо тоторолҡланһа, уның хәле лә яҡшыра.

**Коллегаларығыҙға ниндәй теләктәрегеҙ бар?**

- Ил өсөн ауыр осорҙа беҙҙең һөнәр кешеләренә һорау арта. Үҙегеҙҙең ярҙамығыҙҙы тәҡдим итергә ҡурҡмағыҙ. Был - үҙегеҙҙе, һөнәри оҫталығығыҙҙы, рух ныҡлығын һынап ҡарау өсөн ҙур мөмкинлек.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Роза Әхмәтгәрәй ҡыҙы менән әңгәмәләшеүе еңел дә, ауыр ҙа булды. Сөнки һөнәре тураһында ул ҡыҫҡа ғына итеп яуап бирһә, хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыу, гуманитар ярҙам менән Луганскиға барыу осорон тыныс ҡына һөйләй алмай - үҙен тыныс тоторға тырышһа ла, күҙҙәренә йәш тула, тауышы ҡалтырап-ҡалтырап китә. Ул һаман да нескә күңелле ҡатын-ҡыҙ. Айырма шунда ғына - ул һуғыш күргән, ул һуғышты үткән, ул тормоштоң ҡәҙерен белә...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

ТАБИП МЕНӘН ӘҢГӘМӘ

# ҺАУЛЫҒЫҢДЫҢ ҠӘҘЕРЕН...

## һау саҡта бел

**Йәмғиәттә төрлө сирҙәр күп булһа ла, табиптың "яман шеш" тигән хөкөмөн һәр пациент аяҙ көндә йәшен һуҡҡан кеүек ҡабул итәләр. Эйе, яман шеш киң билдәле һәм дауалауға ауыр бирелгән сир. Ошондай диагноз ҡуйылған икән, тәү сиратта, төшөнкөлөккә бирелергә ярамай, был - һауығыуҙың төп шарттарының береһе, ти Әбйәлил районы Асҡар район дауаханаһы онкологы Ренат МӘҺӘҘИЕВ. Ренат Таңатар улы менән ошо сиргә бәйле ҡайһы бер һорауҙарға яуап эҙләйбеҙ.**



**Ниндәй сәбәптәр онкологияға килтерә ала, кемдәр хәүеф төркөмөнә инә?**

- Яман шеш ауырыуына илтеүсе сәбәптәр бик күп. Шулай ҙа төп фактор булып уның нәҫелдән килеүе тора. Әгәр ҙә атай-әсәй, олатай-өләсәйҙәрегеҙ, башҡа туғандарығыҙҙа был сир булған икән, хәүеф төркөмөнә инеүегеҙҙе аңларға кәрәк. Сирҙе иҫкәртеүсе ысулдарға, уның тәүге билдәләренә айырыуса иғтибарлы булыу шарт. Шулай уҡ заманса клиникаларҙа генетик анализ бирә алаһығыҙ. Әбйәлилгә, мәҫәлән, Магнитогорск ҡалаһы яҡын, унда ошо хеҙмәттәрҙе күрһәтеүсе клиника бар, мин күптәргә уларҙы кәңәш итәм. Шулай уҡ дөрөҫ туҡланмау, насар ғәҙәттәр, организмдың ҡартайыуы ла был сиргә сәбәпсе булып тора. Экология ла организмға кире тәьҫир итеүсе бер фактор.

**Ҡартайыу, насар ғәҙәттәр - былары, әлбиттә, аңлашыла, әммә ни өсөн ауыл ерендә йәшәгән халыҡта ошондай сиргә юлыҡтырыусы факторҙар араһында дөрөҫ туҡланмау һәм экология бар һуң?**

- Хәҙер ауылдарҙа ла сифатлы ризыҡ юҡ. Бер яҡтан ҡарағанда, ныҡ шәп йәшәйбеҙ, натураль аҙыҡ ашайбыҙ кеүек. Шул уҡ ҡалалағы кеүек магазиндар бар. Ялтыр-йолтор ҡапҡа төрөлгән аҙыҡтарға туҡталмай, миҫал өсөн икмәкте генә алайыҡ, сөнки ул беҙҙең барыбыҙҙың да көндәлек аҙығы. Һатыуҙағы икмәктең сәләмәтлек өсөн бер файҙаһы ла булмауы тураһында күп яҙалар, телевизорҙан да күрһәтәләр. Тик уны өйҙә бешереү ҙә проблеманы хәл итмәй. Бына мин ауылда йәшәйем, мал, ҡош-ҡорт тотам. Тауыҡтарға бойҙай һатып алһаң, улар уны ашамай. Хатта күгәрсен дә йүнләп сүпләмәй. Сөнки ауыл хужалығында үҫентеләрҙе утауҙа химия ҡулланыла, уңыш - яҡшы, сифат - түбән. Шуға ла тирмәндән тарттырып алған оноңа ла шикләнеп ҡарарлыҡ, ә төрлө химик ысулдар менән ағартылған магазин оно тураһында әйтергә лә түгел.

Йәки башҡорттоң тағы ла ашаған көндәлек ризығы ит тураһында. Бөгөн ни өсөн һимеҙлек күбәйә? Сәбәптәренең береһе - гормон менән үҫтерелгән ит ашауҙан организмда гормональ тайпылыштар башлана. Магазиндан тауыҡ һатып алып ашамайбыҙ, тимәгеҙ. Күптән инде эре малға ла гормон ҡаҙап, ошо рәүешле табыш алырға өйрәнделәр. Кеше һимеҙ икән, уның йөрәге лә сәләмәт түгел, ябай итеп әйткәндә, йөрәктә лә май бөрә. Ҡанда холестерин кимәле арта. Былар йәйлап инфаркт, шунан инсультҡа килтерә. Ашҡаҙан аҫты биҙе эшмәкәрлеге боҙолһа, шәкәр диабеты булырға мөмкин. Мин быларҙы халыҡты ҡурҡытыу өсөн әйтмәйем, бөгөн ашаған ризыҡҡа күпкә иғтибарлыраҡ булырға саҡырам ғына.

**Сирҙең йыш ҡына үлем осрағы менән тамамланыуының төп сәбәбе нимәлә?**

- Үҙ сәләмәтлегең өсөн үҙең яуаплы икәнен аңламауҙа. Әбйәлил районы миҫалында ғына әйткәндә, үҙәк дауахана онкология буйынса 597 сирле иҫәптә тора, уларҙың 98 осрағы 2022 йылда ғына асыҡланған һәм диспансер күҙәтеүе аҫтына алынған. Яман шеш 37 кешенең ғүмерен өҙгән, шуларҙың 13-ө - ауырыуын ошо йылда ғына белгән. Тимәк, улар сирҙе дауалап булмаған аҙаҡҡы стадияларында, уның башҡа ағзаларға, лимфаларға метастаза биреүенән һуң ғына табипҡа мөрәжәғәт иткән. 9 кеше иһә үҙенең яман шеш менән ауырығанын да белмәйенсә үлеп киткән, диспансер иҫәптә тормаған да.

Мин онколог булып эшләй башлаған 1990 йылдар башында районда рак менән ауырыусылар һаны 200-гә лә етмәй ине. Хәҙер медицина үҫешкән, онкологик сирҙәрҙе иртә стадияла асыҡлау өсөн ҙур мөмкинлектәр бар. Әммә сирҙең күбәйеүе - ошо техника ярҙамында уны иртә асыҡлауға бәйле түгел, ҡыҙғанысҡа күрә, бына шул һуңлап мөрәжәғәт итеүҙә. 2022 йылда 42 пациентты ауырыуҙың - I-II, 10 кешене III һәм 31 кешене IV стадияла иҫәпкә алдыҡ.

Һәр кемдең сәләмәтлеге үҙенең ҡулында. Уның иң ябай юлы - диспансеризация үтеү. Үйланыу өсөн тағы ла бер һан. Онкология буйынса диспансер иҫәптә тороусыларҙың 300-ҙән ашыуында диагнозы асыҡланыуына кәмендә биш һәм унан да күберәк йыл уҙған. Тимәк, рак сире менән дә йәшәп була, ул һеҙгә аҙаҡҡы хөкөм ҡарары түгел. Диагноз раҫланғас та, күңелде төшөрөргә ярамай. Уны яҙмыштың сираттағы бер һынауы итеп ҡабул итергә лә була бит. Ваҡытында дауаланыу курстары үтеү, химия терапияһы алыу, табиптар күрһәтмәһе буйынса операция эшләтеү һәм тәү сиратта, үҙеңде ҡулға алып, төшөнкөлөккә бирелмәү - былар барыһы ла һауығыуға, ғүмерҙе оҙайтыуға булышлыҡ итә.

**Яман шештең ниндәй төрө менән йышыраҡ ауырыйҙар? Сир ҡатын-ҡыҙҙар араһында күберәкме, әллә ир-егеттәрҙәме?**

- Беҙҙә иҫәптә тороусылар араһында ҡатын-ҡыҙҙар күберәк, һөт биҙҙәре (122) һәм аналыҡ муйынсаһы (60) онкологияһы тәүге урында килә. Артабан тура эсәк (33), йыуан эсәк (30), ашҡаҙан (26), үпкә (24) рагы менән сирләүселәр тора. Көслө зат араһында простата аденомаһы күбәйә. Был иһә хәҙер дауахана ла "Ир-егет сәләмәтлеген күҙәтеү кабинеты" асыу мәсьәләһен ҡуя. Йәш буйынса ҡарағанда, күпселекте 65 йәштән уҙған ололар (242) тәшкил итә. Дөйөм сирлеләрҙең 584-е - 18 йәштән өлкәндәр. Онкология менән сирләүсе балалар ҙа бар.

**Халыҡтың үҙ һаулығын ҡайғыртмауы, уға хатта битараф булыуы нимә менән бәйле икән?**

- Бында халыҡтың үҙенең дә, табиптарҙың да ғәйебе барҙыр. Дауаханаға үлергә генә барырға инде, тигәндәрен ишеткәнем дә бар. Абруйлы, тәжрибәле табип урындағы халыҡ өсөн ҙур табыш инде ул. Бөгөнгө йәш белгестәр тәжрибә туплап өлгөрмәй, йә эш хаҡын сәбәп итеп, йә башҡа берәй нәмәһен оҡшатмай, китә лә бара. Элек уҡып бөткәс, эшкә ебәрелгән ергә ереген, йәшәй ҙә китә инеләр. Ниндәй көслө табиптар булды беҙҙең Асҡар дауаханаһында ла. Хәҙер ауырыу осраҡтарын тикшереү, дежур табипты тыңлау өсөн 5 минутлыҡ йыйылып һөйләшеүҙәр ҙә юҡ, ә улар йәш белгескә тәжрибә туплау өсөн ҙур мөмкинлек бирә. Йәштәрҙе шулай өйрәтеп, уларға ярҙам итеп үҫтереп алырға кәрәк. Былтыр үҙ көсөнә ингән ҡарар буйынса, ҡайһы бер профилдәр буйынса район дауаханаһы Белорецҡа ҡарай. Был да ҡайһы бер уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра.

Әммә былар береһе лә үҙ һаулығыңа битараф булырға сәбәп түгел. Автобус йөрөмәй, аҡса юҡ, пенсия килмәгән - былар ҙа сәбәп түгел. Йыл башынан ауылдарға үҙебеҙ барып, халыҡҡа диспансеризация үткәрәбеҙ, унда ла әүҙемерәк ҡатнашһындар ине. Халыҡта сирен йәшергән - үлгән тигән бик тапҡыр әйтем бар. Үҙ сәләмәтлегегеҙ өсөн үҙегеҙ яуаплылыҡ алып өйрәнегеҙ, шул саҡта ғына беҙ, табиптар, һеҙгә ярҙам итә алаsаҡбыҙ. Һаулығығыҙҙың ҡәҙерен ауырығас түгел, һау саҡта белегеҙ.

**Гөлнара КҮСӘРБАЕВА.**
**Ләйсән НАФИҠОВА.**

✓ *Кола өсөн сеймалды татлы тамырҙан алалар, уны төрлө һөтимәр, шул иҫәптән сысҡандар ашай. Күпләп йыйған ваҡытта улар шул тамыраҙыҡтарҙы сысҡан менән бергә преслай.*



ҮӘТ, ШУЛАЙ!



# ҠАНЫН ЙӘЛЛӘМӘГӘН...

**Башҡортостанда йөҙ тапҡырҙан ашыу бушлай ҡан тапшырған донорҙарға йыл һайын биш мең һум аҡса түләнә башлай.**

Закон ошо көндәрҙә республика Дәүләт Йыйылышының пленар ултырышында ҡабул ителде. Бөгөнгө көндә республикала ҡан банкын даими һәм бушлай тулыландырып торған 160-тан ашыу кеше иҫәпләнә. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, республика ҡаҙнаһынан бер тапҡыр бирелә торған түләүгә 815 мең һум аҡса йүнәлтелә. "Ҡан доноры булыу - хәйриәлектең бик мөһим төрө. Һәр процедура - кемдеңдер ғүмерен ҡотҡарыу, ҡайһы берҙә бер нисә кешенең. Донорлыҡ һаулыҡ өсөн хәүефһеҙ. Унан да бигерәк, фән даими ҡан биреүҙең һаулыҡҡа яҡшы тәьҫир итеүен раҫлаған", - тип билдәләне парламент спикеры Константин Толкачев. Башҡортостанда 11 мең кеше Рәсәйҙең почетлы доноры исемен йөрөтә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, вирус гепатиты менән сирләмәгән һәм ВИЧ-инфекцияһы буйынса хәүеф төркөмөнә ҡарамаған һәр кем ҡан тапшыра ала. Почетлы донор булыу өсөн ҡырҡ тапҡыр ҡан йәки 60 тапҡыр плазма бирергә кәрәк.

# АНАЛИЗ АСЫҠЛАЙ...

**"Гемотест Өфө" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт лабораторияһы Башҡортостанда йәшәүсе кешеләрҙең холестерин кимәле юғары булыуын асыҡланы.**

"Сәләмәт ил" милли программаһы сиктәрендә республикала йәшәүселәр анализ тапшырып, "Бауыр, бөйөр һәм тимер", "Йөрәк һәм ҡан тамырҙары" һәм "Ҡалҡан биҙе һәм глюкоза" буйынса комплекслы мәғлүмәттәр алды. Норманан иң күп тайпылыштар "Йөрәк һәм ҡан тамырҙары" анализдары һөҙөмтәләрендә күренде: һәр икенсе пациенттың ҡанында юғары холестерин, ә һәр өсөнсөһөндә триглицеридтар тупланышы артыҡ булып сыҡты. "Холестериндың юғары кимәле атеросклерозға килтерә. Был сир оҙаҡ ваҡыт буйы белENMәй һәм кеше ошо күрһәткескә анализ тапшырмайынса, үҙенә ниндәй хәүеф янауын белмәүе лә ихтимал. Ҡанда триглицеридтарҙың артыуы йөрәк-ҡан тамырҙары сире менән янай", - тине "Гемотест Өфө" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттең баш табибы Виталий Коржавин. "Гемотест"тың табип-эксперттары "Ҡалҡан биҙе һәм глюкоза", "Бауыр, бөйөр һәм тимер" анализдарында ла насар һөҙөмтәләр теркәне. Асыҡланыуынса, һәр унынсы кешенең анализында тиреотроп гормондары һәм АЛТ күрһәткестәре юғары кимәлдә булып сыҡты. Бындай мәғлүмәттәр организмдағы проблемалар хаҡында һөйләй ҙа инде. Әммә был осраҡта диагнозды һәм артабан дауаланыуҙы табип ҡына билдәләйәсәк. Шуға ла "Гемотест" лабораторияһы тейешле белгестәр менән түләүһеҙ телемедицина консультацияһы тәҡдим итә. "Был иһә "Сәләмәт ил" милли программаһының тағы бер этабы: беҙ билдәләрһеҙ сирҙәрҙе ваҡытында асыҡларға һәм дауаланырға ярҙам итәбеҙ", - тип һөйләне Виталий Коржавин.

АҢЛАҒАНҒА...

# Ә ҺЕҘ ҺАМАН КОКА-КОЛА ЭСӘҺЕГЕҘМЕ?



**Американың The Coca-Cola Company компанияһы етештергән был эсемлек Ҡытайҙа торба таҙартыу сараһы булараҡ һатыла башлаясаҡ. Илдең Аҙыҡ сифаты буйынса үҙәк комитеты билдәләүенсә, бындай һығымтаға фәнни тикшереНеүҙәр һөҙөмтәһе килтергән.**

Тәжрибә өсөн Ҡытай төрмәһендәге 500-ҙән ашыу кеше һайлап алынған. Улар алты ай буйы көнөнә өс тапҡыр кока-кола эскән. Һөҙөмтәлә 75 кеше вафат, 150-һе инвалид булған, ҡалғандарының хроник сирҙәре ҡиҫкенләшкән, һаулығына төрлө дәрәжәләге зыян килтерелгән. Ошоларҙан сығып, комиссия был эсемлек кеше ғүмере һәм сәләмәтлеге өсөн зарарлы тип тапҡан һәм илдең аҙыҡ-түлек магазиндарынан алыу тураһында ҡарар сығарған. Шул уҡ ваҡытта кока-колаһың файҙалы яҡтары ла асыҡланған: торба таҙартыу өсөн яҡшы сара булараҡ, сантехника магазинында һатырға тәҡдим ителгән.

2006 йылда Төркиәлә эсемлек составына ҡағылышлы суд тикшереүе башланғайны. Ярлыкта, ғәҙәттә, шәкәр, фосфор кислотаһы, кофеин, карамель, углекислота һәм ниндәйҙер "экстракт" булыуы яҙыла. Ошо экстракт тигәне шик уята ла инде. Һөҙөмтәлә Coca-Cola компанияһы эсемлекте нисек эшләү серен аса. Баҡһаң, экстракт тигәне Cochineal (Кошениль) тип аталған бөжәктән алынған шыйыҡса икән.

Кошениль - Канар утрауында һәм Мексикала йәшәгән бөжәк. Ул томошого менән үҫемлеккә йәбешә лә, уның һутын һурып йәшәй, бер ҡасан да хәрәкәт итмәй, урынынан ҡуҙғалмай. Кошениль өсөн махсус баҫыу тоталар, бөжәктәрҙе ауыл халҡы йыя. Инә бөжәктәрҙән һәм уларҙың йомортҡаһынан кока-колаға көрән төҫ биргән кармин тип аталған буяу алалар. Киптерелгән кошениль йөҙөмгә оҡшап тора, ә ысынында иһә ул бөжәк!

Хәҙер һеҙ беләһегеҙ: эсемлектең исеме ни өсөн "кока" тип аталғаһын.

Ә "кола" һүҙе нимәне аңлата икән? Иң беренсе һеҙгә Coca-Cola фабрикаһында 23 йыл эшләгән хеҙмәткәр тарихы тураһында һөйләргә килә. Кола өсөн сеймалды татлы тамырҙан алалар, уны төрлө һөтимәр, шул иҫәптән сысҡандар ашай. Ҙур компаниялар кола етештереү өсөн уны экскаватор ярҙамында тонналап әҙерләй. Күпләп йыйған ваҡытта улар тамыраҙыҡтарҙы сысҡан менән бергә преслай. Тиреһен, аяҡтарын һуңынан ғына айырып алалар. Эсемлек ҡыҙыл-көрән төҫтә булғас, сысҡандың ҡаны, ашҡаҙан шыйыҡсаһы булыуы тураһында уйлап ҡараған кеше лә булмай. Ҙур компаниялар, әлбиттә, зарарлы матдәләрҙе химикат ярҙамында бөтөрөргә тырыша. 23 йыл буйы фабрикала эшләгән был хеҙмәткәр бер стакан да кока-кола эсмәгән. Шунан сығып, үҙегеҙ һығымта яһағыҙ инде.

Вашингтон ғалимдары кока-кола ингредиенттарының береһен тикшергән. Баҡһаң, карамель иретелгән шәкәр түгел икән, ә юғары баҫым, температура ярҙамында алынған шәкәр, аммиак һәм сульфиттың химик ҡатнашмаһы. Ул үпкә, бауыр һәм ҡалҡан биҙе яман шешенә, лейкемияға килтерә.

Шулай уҡ газировкала спирт бар: ул теге "7 икс" йәшерен өҫтәмәһенең нигеҙе. Алкоголгә бер нисә тамсы еҫле май, кориандр һәм корица һалалар.

Ә кошениль шыйыҡсаһы бөтөнләй сертификация үтмәгән, шуға күрә кока-кола ҡайһы бер илдәрҙә бөтөнләй етештерелмәй, мосолмандарҙа уны эсеү тыйылған. Һаулыҡҡа зыяны өсөн Һиндостандың юғары суды, һуңғараҡ Латвияла ла Coca-Cola һәм Pepsi башланғыс класс балаларына эсеү тыйылған. Англияла, Украинала ла ҡайһы бер мәктәптәр был эсемлектән баш тартҡан.

**Coca-Cola тураһында тағы ла ҡыҙыҡлы факттар:**

- Кока-колала ортофосфор кислотаһы булғанлыҡтан, ул тутыҡты, сәйнүктәге юшҡынды, унитаздағы насар таҙартылған таптарҙы бөтөрә.
- Америка полицейскийҙары авария урынындағы ҡанды йыуыр өсөн эш автомобилдәрендә бер нисә литр кока-кола йөрөтә. Кейемдәге тапты бөтөрә, бының өсөн эсемлекте бысранған урынға һибергә лә, ғәҙәттәгесә кер онтағы өҫтәп йыуырға.
- Ҡайһы бер Азия илдәрендә фермерҙар кока-коланы ҡоротҡостарға ҡаршы ҡуллана, сөнки ул химикатҡа ҡарағанда арзан, ә һөҙөмтәһе шул уҡ.
- Донъяла секунд һайын Coca-Cola компанияһы етештергән 8000 стакан эсемлек эселә.

Үрҙә атап кителгәндәр кока-колаға ғына түгел, башҡа газлы эсемлектәргә лә ҡағыла. Етештереүсе компанияларға килем генә кәрәк, һаулығығыҙҙы үҙегеҙ хәстәрләгеҙ.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ҺЫУЫҠҠА АЛЛЕРГИЯ



**Февраль - ҡыштың ахыры булһа ла, ғәҙәттә, ҡаты һыуыҡтар был айға ла тура килеүсән. "Ғинуар булһам, һыйырҙың мөгөҙөн һындырыр инем", тип әйткән ти бит шаҡай үҙенең һан ягынан ҡыҫҡараҡ булыуына ишаралап. "Һыуыҡҡа аллергия" тигән сир ҙә тап ошо ваҡытта күптәрҙең тормошон ҡатмарлаштыра.**

Белгестәр билдәләүенсә, аллергия тип йөрөтөлһә лә, ул ысын мәғәнәһендә аллергия түгел, сөнки бөтөнләй икенсе механизм буйынса үҫешә. Ныҡ өшөгәндә тирелә сабыртма барлыҡҡа килә. Тирелә кесертkән саҡҡандағы кеүек таптар барлыҡҡа килә лә, күпмелер ваҡыттан һуң үтә. Бындай реакцияһы булғандарға һыуыҡта тунДырма ашарға, һалҡын һыу эсергә ярамай - ирен, тел, тамаҡ лайлалы тиресәһенең көслө итеп шешенеүе ихтимал. Тын алыу, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы эшмәкәрлеге боҙолоуы, организм шок хәленә инеүе бар.

Сирҙең сәбәптәре асыҡланмаған. Күбеһенсә бәләкәс балаларҙа, өлкәндәр араһында хроник сирҙәре булғандарҙа күҙәтелә. Лаборатор диагностика ла файҙа бирмәйәсәк, табиптар боронғо ысул ҡуллана - боҙ киҫәген ҡушар һөйәгенең эске ягына 4 минутҡа бәйләп ҡуялар. Тире шешһә, сабыртһа, реакция бар. Бынан һуң аллерголог-иммунолог дарыуҙар билдәләй ала. Әммә ул сирҙең билдәләрен генә "дауалай". Проблеманы тулыһынса хәл итеүҙең юлы бер - йылыраҡ климатлы төбәккә күсеү.

**Һыуыҡҡа аллергияһы булғандарға түбәндәге кәңәштәр ярҙам итәсәк:**

- йылыраҡ кейенергә - бейәләй, маңлайҙы, биттәрҙе ҡаплап торған шарф мотлаҡ;
- биткә, ҡулдарға ҡышҡы һыуыҡта махсус крем һөртөргә;
- тышта оҙаҡ йөрөмәҫкә;
- ризыҡты йылытып ашарға, йылы эсемлектәр эсергә, тунДырма ла бер аҙ ирей башлаған булырға тейеш;
- бассейнда, тәбиғи һыу сығанаҡтарында һыу инмәҫкә (һыуҙың йылылығы кәмендә 28 градус булырға тейеш);
- саңғыла, конькиҙа йөрөү ҙә тыйыла;
- һыуыҡҡа аллергияны сынығыу менән дауалап булмауын белегеҙ. Температураның кинәт үҙгәреүе, киреһенсә, был сирҙе ҡатмарлаштыра.

*СӘЙӘХӘТНАМӘ*

**Бөгөнгө көндә мәҙәниәт, әҙәбиәт, ғөмүмән, рухиәт менән ҡыҙыҡһынған һәр кем "Замандаш" тип аталған проект хаҡында әҙме-күпме хәбәрҙарҙыр, моғайын. 2016 йылдан инеш алған үҙенсәлекле ҙур эштең башында Башҡортостан Республикаһының драматургия һәм режиссура Үҙәге директоры Әлиә Яхина, художество етәксеһе Зиннур Сөләймәнов һәм режиссер, шеф-драматург Сәрүәр Сурина тора.**

# КЕМДӘР УЛАР -

## бөгөнгө ауылды йәшәтеүселәр?



Быға тиклем "Замандаш" проектында ҡатнашыусылар республиканың иң төньяҡ-көнбайышында урынлашҡан Балаҡатай районының Билән ауылында, артабан Күгәрсен, Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән, Йылайыр районларында экспедицияла булды. Улар ауыл халҡы менән осрашып, уларҙың йәшәйешен өйрәнә, ата-бабаларынан ҡалған ҡомартҡылар менән таныша, шәжәрә ептәрен барлай, проблемалары, маҡсаттары, хыялдары менән ҡыҙыҡһына. Һәр экспедицияға айырым маҡсат ҡуйыла. Мәҫәлән, Күгәрсен районында булғанда "Нисек йәшәйһең, ауыл уҡытыусыһы?" тигән һорауға яуап эҙләйҙәр. Сөнки һуңғы йылдарҙағы ҡулайлаштырыу сәйәсәте һөҙөмтәһендә ауылдарҙа мәктәптәр ябылды, күп йылдар уҡытҡан тәжрибәле тиҫтәләгән уҡытыусы эшһеҙ, урамда тороп ҡалды. Һәр айырым осраҡ артында кеше яҙмышы ята. Кемдер был хәл менән еңел генә ризалашып, икенсе эшкә төшһә, кемдер үҙ һөнәренә тоғро ҡалып, ситкә китеп, уҡытыусы хеҙмәтен дауам итә, ҡайһылары эшһеҙлектән төшөнкөлөккә бирелә, кемдәрҙер насар ғәҙәттәргә өйрәнә... Ошондай хәл-ваҡиғалар, әңгәмәләшеүҙәр, күңелендә асып бирерлек һөйләшеүҙәр аша экспедицияның һөҙөмтәһе булып "Ауыл уҡытыусыһы" тигән спектакль-вербатим тыуа. Уны ҡараған тамашасылар был спектаклдә үҙен күрә һәм ул республика кимәлендә ҙур резонанс ала...

Быйылғы тәүге ҡышҡы экспедицияға "Замандаш" республиканың иң алыҫ районы Хәйбуллаға юлланды. Унда билдәле әҙиптәр Әминә Яхина, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, "Тамаша" журналынан Миләүшә Ҡыҙрасова, "Белские просторы" журналынан Розалия Вахитова, Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхананың ҡулъяҙмалар һәм һирәк осрай торған баҫмалар бүлеге хеҙмәткәре Ислам Байғужин, шулай уҡ БДПУ-ның, Өфө фән һәм технологиялар университетының Стәрлетамаҡ, Сибай филиалдарының башҡорт филологияһы факультеты студенттары ҡатнашты. Өфө ҡалаһынан башланған сәйәхәттә "Замандаш"тар Күгәрсен районы Хоҙайбирҙин ауылындағы Шәһит Хоҙайбирҙин һәйкәле янында туҡталып, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улына баш эйҙе, Туйымбәт ауылында Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның йорт-музейында, Хәйбулла районы үҙәге Аҡъяр ауылының тарихты һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейында булды, райондың үткәне һәм бөгөнгөһө, билдәле шәхестәренә арналған бай экспонаттар менән танышты. Артабан юл төп тәғәйенләнешебеҙ - Хәйбулланың иң төпкөл ауылдары Әбеш, Бәләкәй Арыҫланғол һәм Һаҡмар-Наҙарғол ауылдарына илтте.

Халыҡ араһында Вәзәм исеме менән билдәле Бәләкәй Арыҫланғол халҡы беҙҙе ауыл мәҙәниәт йортонда милли кейемдәрҙә, таҡмаҡ әйтеп, сәкәк һәм буҙа менән ҡолас йәйеп ҡаршы алды. Ҡул эштәренең иҫ китмәле матур һәм бай күргәҙмәһе менән танышыу ғына түгел, хатта үҙең эшләп ҡарау мөмкинлеге лә булдырылғайны. Был рухи усаҡҡа йырлап-бейеп күңел асырға ғына йөрөмәй халыҡ, улар утлы ҡан-ҡойош эсендә йөрөгән егеттәребеҙгә йылы ойоҡбаштар, бейәләйҙәр бәйләп ебәргән. Әле иһә һалдаттарыбыҙға һарыҡ йөнөнән йылы түшәк эшләү менән мәшғүл ине. Ҡул эшенә оҫталығы менән дан алған вәзәмдәр спорт менән дә әүҙем шөғөлләнә: беҙ барған көндө ауылда район мәктәптәре уҡыусыларының хоккей командалары араһында билдәле ауылдаштары, күп йылдар мәғариф министрлығында эшләгән Артур Шәйхетдин улы Сурин хөрмәтенә хоккей турниры бара ине. Был ярыш быйыл 9-сы тапҡыр үткәрелә һәм уға А.Ш. Суриндың улы Урал, туғандары Мөхтәр, Фәрит, Гөлназ Суриндар, Таһир Юнысов бағыусылыҡ ярҙамы күрһәтә. Атаһының яҡты иҫтәлеген мәңгеләштергәндәре өсөн бик рәхмәтле уның балалары һәм тормош юлдашы. Бөтөн эште ойоштороп, башлап йөрөүсе ауыл мәҙәниәт һәм ял үҙәге етәксеһе Г.Ғ. Сурина, Әбеш ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Т.М. Юнысов, ауыл тотҡалары булған староста, депутаттар, ағинәйҙәр һәм аҡһаҡалдар ҡоро ярҙамында "Айыҡ ауыл" конкурсында ла еңеүгә өлгәшә, мәҙәниәт тормошонда ла ҡайнап йәшәй вәзәмдәр. Тәрбиәгә бала алып көтөүсе фиҙаҡәр ғаиләләр ҙә, үҙ эшен аҫҡан эшҡыуарҙар, фермерҙар, шулай уҡ балыҡсылар, һунарсылар ҙа күп бында.

Әбеш - ауыл биләмәһе хакимиәте урынлашҡан ҙур, төҙөк ауыл. Унда беҙ урта мәктәп коллективы менән осрашыу үткәрҙек, балаларҙың һәм уҡытыусыларҙың сығыштарын ҡараныҡ. Эпосты яттан һөйләү буйынса "Урал батыр" мәктәбе ойошторған башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әминә Юнысованың эш тәжрибәһе менән уртаҡлашыуын, уның уҡыусыһы Искәндәр Байгилдиндең "Урал батыр" эпосынан өҙөк һөйләүен кинәнеп тыңланыҡ.

Һаҡмар-Наҙарғол, йәки халыҡ телендә Бүре атамаһы менән билдәле ауыл семәрлебиҙәкле өйҙәре, тап-таҡыр юлдары, алсаҡ халҡы менән күңелебеҙҙе яуланы. Ситтән ҡарағанда ҙур ғына күренһә лә, әйтеүҙәренсә, барлығы 25 кенә өйҙә 60-лап кеше йәшәй икән. Башланғыс мәктәптә бары бер генә бала уҡый, ҙурыраҡтар Әбеш мәктәп-интернатында ятып белем эстәй. Матур-матур, бай йыһазлы заманса өйҙәрҙең буш тороуы күңелде ҡырҙы... Ни хәл итәһең: эш юҡ, мәктәп юҡ, район үҙәгенән, ҡалаларҙан алыҫ урынлашҡан. Ә йәштәргә эшләргә, донъя көтөргә, балаларҙы уҡытып, кеше итергә кәрәк. Йәйлап ауыл һүнә, бөтә бара. Үкенескә күрә, урамда уйнап йөрөгән бер генә баланы ла тап итмәнек... Әммә халыҡ күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй, гөрләтеп донъяһын көтә, барлыҡ өйҙәр лә газ менән йылытыла, йылы һыуы килеп тора, бөтөн уңайлыҡтары йорт эсендә. Тик уларҙа йәшәүселәрҙең иң йәше лә - хаҡлы ялда...

"Кемдәр улар бөгөнгө ауылды йәшәтеүселәр, башҡорт милләтен һәм рухи ҡиммәттәрен һаҡлаусылар?" Һәр осрашып һөйләшкән кешеләр менән беҙ ошо һорауҙарға яуап табырға тырыштыҡ. Һәм... халыҡ араһында уникаль, үҙенсәлекле, уңған, оҫта кешеләрҙең күплегенә хайран ҡалдыҡ! Хозур тәбиғәте, ҡаҙылма байлыҡтары менән генә түгел, ошондай оло шәхестәре менән бай икән Хәйбулла төбәге! Шәхсән мин аралашып һөйләшкән: Вәзәм ауылынан Фариза, Зәкиә һәм Мәрйәм апайҙар, Әбештән Виләә, Лилиә, Фәриҙә апайҙар, уҡыусылар һәм уҡытыусылар, Бүренән Шәрифйән ағай менән Вәлимә апай, Мөхәмәтйән йыраусының дауамы - Фәймә менән Садиҡ Ҡаҙаҡбаевтар... Һәр береһе күңелемә уйылып ҡалды, һәр береһе ниндәйҙер сере менән һиҫкәндерҙе, яҙмышының ҡабатланмаҫлығы менән һоҡландырҙы һәм тетрәндерҙе...

Үҙҙәренең ихласлығы, эшһөйәрлеге, ҡунаҡсыллығы, таланттарының күплеге һәм төрлө-төрлөлөгө менән ғашиҡ итте беҙҙе ошо ауылдар! Балаларына матур тәрбиә биргән өлгөлө ата-әсәләр, ҡортсолоҡ, үҫемлекселек менән шөғөлләнеп, мул йәшәгән шухси хужалыҡтар, йыр-моңо менән йәшәргә дәрт өҫтәгән тәбиғәттән бирелгән һәләтлеләр, үҙе өсөн генә шиғыр яҙып, күңелдәрҙе имләгән ҡатындар, нағышлап-һырлап ағасҡа йән өргән оҫта ҡуллы ир-ат, ҡурайы-йырҙары менән бергә иман юлын да бер ҡатар алып барған имам Камил ағай Илембәтов... Кемдәр генә юҡ араларында! Бына ошолар инде бөгөнгө ауыл усағын ҡабыҙыусы, ялҡын өҫтәп тороусы, һүндермәүсе, илебеҙ, халҡыбыҙ, телебеҙ, йолаларыбыҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ, динебеҙ-иманыбыҙ һағында тороусылар, ауылды, тимәк, милләтебеҙҙе һаҡлаусылар!

Алыҫ сәйәхәтебеҙҙә эшебеҙҙә төп терәгебеҙ булған етәкселәребеҙ Сәрүәр Сурина, Зиннур Сөләймәнов, Хәйбулла районы мәҙәниәт бүлеге методисы, райондың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Миңзифа Ишемғолова, Әбеш ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Таһир Юнысовҡа, ауыл мәҙәниәт һәм ял йорто директоры Нәсимә Ибраһимова, Вәзәм ауыл клубы етәксеһе Гөлназ Суринаға, Һаҡмар-Наҙарғол ауыл клубы етәксеһе Эльвира Юнысоваға һәм башҡа беҙгә ярҙам күрһәткән, беҙҙең менән осрашырға, һөйләшергә ваҡыт бүлгән һәммә ауыл халҡына оло рәхмәтлебеҙ!

**Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ХӘТЕР ЯҢЫЛЫШЫУЫМЫ?



**Күптән түгел телепрограммала "Ошибка памяти", беҙҙеңсә әйткәндә, "Хәтер яңылышыуы" тигән кинофильм буласағын күреп ҡалдым, әммә ҡарарға форсат булманы. Ә шулай ҙа был ошо төшөнсә тураһында уйланып алырға сәбәп булды.**

Хәтерҙең хаталаныуы, яңылышыуы, онотолоп китеүҙәр - ул оло йәшкә еткәс башлана, тиҙәр. Бына минең бер танышым бала сағын бөтөнләй иҫләмәй. Бергә уйнаныҡ, бергә үҫтек, бергә уҡыныҡ, шул осорҙан берәй ҡыҙыҡлы мәлде һөйләһәң, иҫенә төшөрә алмай. Шундай матур мәлдәрҙе нисек онотҡан һуң ул, тулҡынланыу, һоҡланыу хистәрен нисек тоймаған, тип аптырайым...

Быларҙы ниңә яҙа икән, тип уйлайһығыҙҙыр. Уның сәбәбе - бөгөн Украинала барған мәхшәр. Илебеҙ бер тапҡыр фашизмды еңеп, Көнбайыш илдәрен ул ауырыуҙан ҡотҡарғайны бит. Йылан үлә, ағыуы ҡала, тип бушҡа әйтмәйҙәр икән. Ҡалған икән, донъяны, кешеләр аңын ағыулауҙы дауам итә икән...

Һиндостан халҡында "Черная неблагодарность разрушает карму" тигән әйтем бар. Һиндостан Англия ҡоллоғона ҡаршы көрәшкәндә Советтар Союзының ҙур ап-аҡ линкоры диңгеҙҙән йөҙөп килеп, еңеүҙең һуңғы нөктәһен ҡуйған. Быға бик күп йылдар үтһә лә, ололар әле булһа был һоҡланғыс мәлде йәш быуынға һөйләй, улар иһә үҙ балаларына бәйән итәсәк. Ошоно бөтөн халыҡ белгәнлектән, Һиндостан беҙҙең илгә бер ҡасан да дошман булмаясаҡ. Балтика буйы илдәрендә лә оло быуын Совет илен һағынып иҫкә ала, тиҙәр, ә йәштәре һәйкәлдәр менән көрәшә. Бына бит ул хәтерҙең яңылышыуы!

"Башҡортостан" гәзитендә БДУ тамамлап, йүнәлтмә менән АҠШ-ҡа практикаға барған бер ханым тураһында яҙғайнылар. Эшкә ҡалырға тәҡдим иткәндәр. Тәжрибә туплау өсөн ризалашҡан, банкта эшләй башлаған. Бөтәһе лә уңышлы барған, тик уны бер нәмә аптыратҡан: Еңеү көнө етһә, фашизмды Америка еңгән, ә Англия менән Франция ярҙам итеүсе илдәр, тип телмәр тоталар икән. Бына ниндәй насар сир икән ул "Ошибка памяти".

Әйткәндәй, теге ханым отпускыға ҡайтҡанда ошо хаҡта атаһына һөйләгән. Атаһы: "Ундай ялғанды ишеткең килмәһә, иленә ҡайт, балам", - тип кенә әйткән...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

✓ *Ғөмүмән, 1812 йылдағы Ватан һуғышында башҡорттар иң ҡеүәтле дошманға ла ҡаршы тора алырлыҡ, тиҙ ойошоу һәләтле, сыҙамлы, ҡыйыу яугирҙар булып тарихҡа ингән.*



ИНТЕРНЕТТАН



## ЯРАТҠАН КӨЙ - ТАТЛЫ ЙОҠО

■ Ғалимдар балаларҙы яңыса уҡырға өйрәтмәксе. Был программа педагогика һәм психология ғына түгел, баланың биологик талаптарына нигеҙләнгән. Экспериментта 49 беренсе класс уҡыусыһы ҡатнашҡан. Белгестәр бала психик яҡтан ғына түгел, физик яҡтан да үҫешә алырлыҡ итеп уҡыу программаһы төҙөгән. Көндөң тәүге яртыһында балалар уҡыу, математика, тәбиғи фәндәрҙән белем алған, спорт сараларында ҡатнашҡан. Төштән һуң ғәмәли дәрестәр башланған. Уҡыу дәресендә балалар оҙаҡ итеп хәрефтәр һәм өндәрҙең айырымлығын өйрәнгән, уларҙы ҡабатлаған. Көн ахырында улар үҙҙәре һайлаған түңәрәктәрҙә шөғөлләнгән. Был түңәрәктәр балала дофамин гормонын арттырырға тейеш булған. Ошо рәүешле уҡыу үҙенең яҡшы һөҙөмтәләрен биргән: сентябрҙә уҡыусыларҙың 8 проценты ғына хәрефтәрҙе бәйләп уҡый белһә, майҙа был күрһәткес 73 процентҡа еткән. Бынан тыш, уҡыусылар үҙҙәрен күпкә сәләмәтерәк һәм яҡшыраҡ тойған.

■ Йоҡлар алдынан талғын көй тыңлау яҡшыраҡ кеүек. Бындай музыка кешене тынысландыра, йоҡоға көйләй. Әммә ғалимдар асыҡлауынса, кеше үҙенең күңеленә яҡын һәм ҡабат-ҡабат тыңлап ятлап бөткән музыкаһынан яҡшыраҡ тыныслана. Кешенең баш мейеһе шулай ҡоролған, ул автоматик рәүештә күңегелгәнгә өҫтөнлөк бирә. Шуға ла яратҡан көйөгөҙҙө тыңлағыҙ, шул саҡта йоҡоғоҙ ҙа татлы булыр. Ә музыканың психотерапевтик тәьҫиренә килгәндә, бишек йырҙарын ғына миҫалға килтереү ҙә етә. Әммә сабыйҙы йырҙан бигерәк, әсәнең тауышы тынысландыра икән.

■ Ризыҡтың һаҡлау ваҡытын оҙайтыу өсөн нитрит һәм нитраттар йыш ҡына ҡулланыла. Франция ғалимдары составында нитрит булған ризыҡтарҙы күп ҡулланыу һәм 2-се типтағы диабет сире хәүефе араһында бәйләнеш барлығын асыҡлаған. Был һығымта 104 мең кеше ҡатнашлығында туплаған масштаблы демографик һәм медицина мәғлүмәттәрен анализлауҙан яһалған. Ҡатнашыусыларҙың ниндәй ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүенә ҡарап, ғалимдар уларҙың составын ныҡлап өйрәнгән. Һөҙөмтәлә, нитриттарҙың (әммә нитраттарҙың түгел!) организмдың метаболик процестарына кире йоғонто яһауы билдәле булған. Аҙыҡ сәнәғәтендә ит эшкәрткәндә нитрит өҫтәмәләрен ҡулланмау сәләмәтлек өсөн ҙур аҙым булаcаҡ, ти белгестәр. Быға тиклем дә бындай тәҡдимдәр яңғырағайны, әммә әлегә халыҡ тарафынан хуплау тапманы.

■ Майлы ризыҡ ашауҙан һимергән кешеләрҙең иммунитеты ныҡ зыян күрә икән. Хатта кеше артыҡ ауырлығынан ҡотолғандан һуң да организмдың нормаль хәлгә ҡайтыуы шикле, матдәләр алмашыныуы кире үҙ фукцияһын тергеҙә алмай. Ғалимдар миҫал итеп өлкәнәйгән кешеләрҙең күреү һәләте юғалтыуын килтерә. Быға тиклем дә уның һимереү менән яфаланған пациенттарҙа йышыраҡ осрауын раҫлағайнылар инде. Ҡомаҡтарҙа үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, тиреләге артыҡ май ҡатламы үҙенсәлекле молекулалар бүлеп сығара башлай, был хатта ябыҡҡандан һуң да туҡтамай. Һөҙөмтәлә ошо молекулалар тәндең башҡа өлөштәренә лә күсеп йөрөп, унда ялҡынһыныу процесы башлана һәм йәйлап күреү һәләте юғала ла инде.

БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ

**Былтыр июлдә республика Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостанда ойоштороласаҡ Евразия күсмән цивилизациялар музейы проекты менән таныштырҙы. Шишмә районы Турахан кәшәнәһе янында урынлаштырыуҙы күҙаллаған музей проекты сит ил һәм Рәсәй ғалимдары тарафынан оло хуплауға лайыҡ булды. Музей элекке ваҡыттарҙа Урал итәгендә, Ҡара диңгеҙ буйҙарында ниндәй күсмән халыҡтар йәшәүе, уларҙың көнитмеше, үҙҙәренән һуң ниндәй мираҫ ҡалдырыуҙары хаҡында бай мәғлүмәт туплаясаҡ, тип билдәләнә. Асыласаҡ музей тураһында Башҡортостан Республикаһының Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир ҒӘЙНУЛЛИН бәйән итә.**

# БЫНДАЙ МУЗЕЙҘАР...

## Ҡытайҙа, Эске Монголияла ғына бар



**➔ Музей тураһында тулыраҡ мәғлүмәт ишетергә ине?**

- Музей кешелек үҫешенең һуңғы 5 - 6 мең йыллыҡ дәүерен үҙ эсенә аласаҡ. Экспозиция неолиттан алып Урта быуаттың һуңғы осоронда ҙур биләмәлә йәйрәп ятҡан Евразия далаһында һәм Урал-Волга буйы далаларында көн иткән күсмән халыҡтар тураһында мәғлүмәт бирәсәк. Ул ваҡыттарҙа донъяла Мысыр, Месопотамия, Европа халҡы цивилизация һәм мәҙәниәт таратыусы, ә башҡалар ҡырағайҙар кеүек итеп ҡабул ителһә лә, Евразия далаларында йәшәүселәр кешелек тарихына күп үҙгәрештәр индергән. Нәҡ Ҡара диңгеҙ буйы, Ҡаҙағстан, Көньяҡ Урал далаларында бынан 5 мең йыл элек ҡырағай атты йорт хайуаны итеүгә өлгәшкәндәр. Был кешелек цивилизацияһы өсөн оло ҡаҙаныш булған (шулай уҡ ҡырағай атты ҡулға өйрәтеүсе төбәктәр тип Иран, Анатолия, Левант, Венгрия төбәктәре лә ҡарала). Атты ҡулға эйәләштереп, кеше мобиль, тиҙ хәрәкәт итә алыуға өлгәшкән, ә был үҙ сиратында уға ҙур биләмәләрҙе үҙләштерергә мөмкинлек биргән. Әйткәндәй, археологик мәғлүмәттәрҙән сығып ҡарағанда, Пржевальский аты ла Ҡаҙағстан далаларында (ботай мәҙәниәте кешеләре) ҡулға эйәләштерелеп, һуңынан кире ҡырағайланған.

**➔ Йәмғиәт әле булһа элекке ваҡыттарҙа Көньяҡ Уралда, шулай уҡ Евразия биләмәһендә йәшәгән күсмән халыҡтар тураһында бик аҙ мәғлүмәткә эйә...**

- Был ысынлап та шулай һәм уларҙың донъя тарихында тотҡан урыны тураһында ла бик аҙ һөйләнелә. Ә шул уҡ ваҡытта был биләмәләрҙә йәшәгән халыҡтар Монгол далаларынан Венгрияға һәм Көнсығыш Австрияға тиклемге арауыҡтарҙа күсеп йөрөп, бер материктан икенсеһенә яңылыҡ алып килгән һәм ошо рәүешле цивилизация үҫешенә булышлыҡ иткән. Мәҫәлән, Ҡытайҙа уйлап сығарылған дарыны Европаға монголдар алып килеүен ғалимдар күптән иҫбатланы.

**➔ Ә был биләмәлә йәшәүселәрҙең үҙ асыштары булғанмы?**

- Әлбиттә. Мәҫәлән, һөйәк ҡаптырмалы ҡатмарлы йәйә (сложносоставной лук с костяными накладками) үҙ ваҡытында бик көслө ҡорал булған. Ғәҙәти йәйә бөгөлгән ағастан ғына эшләнгән. Шулай уҡ төрлө үҙенсәлеккә эйә ике сорт ағастан эшләнгән йәйәләр ҙә булған. Күсмән халыҡтар ҡулланған йәйәнең дуғаһы эске яҡтан һығылмалы һөйәк пластина менән көсәйтелгән, ә тыштан һеңер менән нығытылған. Былар йәйәнең һығылмалығын һәм көсөн арттырған, шул уҡ ваҡытта улар ыҡсым булған. Бындай йәйәләр алыҫ атыу менән бер рәттән, төрлө уҡ ҡулланыуға ла ҡулайлаштырылған.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ҠАҺЫМ ТҮРӘНЕ ХӘТЕРЛӘП...

**Ошо көндәрҙә Стәрлетамаҡ районының Мырҙаш ауылында "Айыҡ ауыл-2022" республика конкурсы сиктәрендә "Замандарҙың тере бәйләнеше. Ҡаһым түрә - башҡорт халҡының ғорурлығы" тип аталған муниципаль-ара форум уҙҙы. Сара башҡорт халҡының данлыҡлы ҡаһарманы, 1812 йылғы Ватан һуғышында һәм 1813-1814 йылдарҙағы рус армияһының сит ил походтарында ҡатнашҡан башҡорт полкы командиры Ҡаһым Мырҙашев һәм данлыҡлы тоньяҡ амурҙары иҫтәлегенә бағышланды.**

Ҡаһым түрә Мырҙашев сығышы менән Айыусы ауылынан. Риүәйәттәрҙә батырыбыҙ ҡыйыу, зирәк, оҫта юлбашсы итеп һүрәтләнә. Ғөмүмән, 1812 йылдағы Ватан һуғышында башҡорттар иң ҡеүәтле дошманға ла ҡаршы тора алырлыҡ, тиҙ ойошоу һәләтле, сыҙамлы, ҡыйыу яугирҙар булып тарихҡа ингән, уларҙың даны халҡыбыҙ күңелендә бөгөнгә тиклем йәшәй. Айыусы һәм Мырҙаш ауылы халҡы үҙҙәрен Ҡаһым түрә вариҫтары тип иҫәпләй һәм улар хәтеренә лайыҡлы булырға тырыша.

Мәҫәлән, илебеҙҙең барлыҡ төбәктәрендә махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан ир-егеттәребеҙгә гуманитар ярҙам йыйыу буйынса берҙәм эш ойошторолған бер мәлдә Стәрлетамаҡ районы халҡы ла был шәфҡәтлелек акцияһына бик әүҙем һәм тәүгеләрҙән булып ҡушылды. Ошо көндәрҙә генә Мырҙаш һәм Айыусы ауылы ҡатын-ҡыҙҙары махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан һалдаттарға ит быҡтырып, тушенкалар әҙерләне. Ит менән фермер, район Советы депутаты Илдар Ишбирҙе улы Буранғолов тәьмин итте. Әйтергә кәрәк, был уларҙың беренсе ярҙамы ғына түгел. Махсус хәрби операция башланғас та улар ҙа, районды башҡа хужалыҡтары халҡы ла бер-нисә гуманитар ярҙам ойошторҙо. Ә инде Стәрлетамаҡ районы башҡорттары ҡоролтайы тарафынан иғлан ителгән "Батырға - йылы ойоҡбаштар" акцияһы киң ҡоласлы акцияларҙың береһе булараҡ танылды. Тылдағыларҙың ярҙамы, терәге бик кәрәк беҙҙең һалдаттарға, тигәнде яҡшы аңлаған оло быуын вәкилдәре, шулай уҡытусылар, ағинәйҙәр күҙ нурҙарын ҡушып, теләктәр әйтеп, уландарға йылы ойоҡбаштар бәйләп оҙатты.

...Ҡаһым түрә менән бәйле тарихҡа арналған түңәрәк ҡор ойоштороуҙағы һөйләшеүҙә Стәрлетамаҡ районының почетлы гражданы Вельмир Аҙнаев һәм район хакимиәте башлығы урынбаҫары, Стәрлетамаҡ районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Эльвера Иманғолова алып барҙы. Һөйләшеүҙә Бөтөн донъя башҡорттары ҡорол-

✓ ***Буласаҡ музей биналары кәшәнә янындағы ландшафтты иҫәпкә алып проектланды, һәм улар бер нисек тә кәшәнәне ҡапламай, уның баһаһын төшөрмәйәсәк.***

➔ **Музей ниндәй экспонаттар нигеҙендә тулыландырыласаҡ? Ҡыҙыҡлы экспонаттар ҡайҙан алынасаҡ?**

- Башҡортостанда археологик экспедициялар йыш ҡына үткәрелеп тора. Мәҫәлән, Шишмә районында Турахан кәшәнәһе янында, Өфө һәм Салауат райондарында ҡаҙылма эштәре әүҙем ойоштоболо. Беҙҙең төбәктә күсмән халыҡтарға ҡағылышлы әйберҙәр, сығанаҡтар бөтә экспедициялар ваҡытында ла йыш табыла. Шулай уҡ археологик экспедициялар ваҡытында Урта быуатҡа ҡараған әйберҙәрҙе күпләп табабыҙ, ләкин, ҡыҙғаныҫҡа ҡүрә, беҙҙең республикала был һуңғы осор бик аҙ өйрәнелгән. Ә беҙҙәге кәшәнәләр иһә шул осор мәҙәниәтенең тере шаһиттары булараҡ, оло тарихи әһәмиәткә эйә. Башҡа ерҙәрҙә улар емерелгән, ә беҙҙә һаҡланған. Хөсәйенбәк кәшәнәһе емерелеп, 1910 йылда кире тергеҙелгән, әлбиттә, ә бына Турахан кәшәнәһе беҙгә быуаттар дауамында үҙгәрмәйенсә тиерлек килеп еткән. Ҡасандыр уның башында тимер манара булған, ләкин бер осор ул көмбәҙҙән бер өлөшө менән емерелеп төшкән. Әлбиттә, әлеге музейҙы төҙөү барышында кәшәнәгә реставрация эшләнәсәк, ләкин уға бик һаҡ ҡағыласаҡбыҙ. Был эштәр кәшәнәне киләсәк быуындарға һаҡлап ҡалыу ниәтенән сығып ҡына башҡарыла.

➔ **Археологияла заманса технологиялар, яңы ҡараш ҡулланыла һәм был ярҙам итмәйенсә ҡалмайҙыр, моғайын.**

- Беҙҙең республикала цифрлы археология бик яҡшы үҫешә. Мәҫәлән, бығаса асылмаған ҡомартҡыларҙы табыу өсөн осоп йөрөүсе аппараттар (беспилотник) ҡулланыла, улар ер өҫтөн фотоға төшөрә һәм һуңынан был фотоһүрәттәр компьютерҙа эшкәртелә, шул рәүешле бығаса тиклем күренмәгән ҡурғандар һәм кешеләр йәшәгән урындар табыла. Әйтергә кәрәк, күрше төбәктәр әлегә былай технологиялар менән бик маҡтана алмай.

Быйыл шулай уҡ заманса лидарҙар һатып аласаҡбыҙ. Улар ярҙамында лазер сканеры менән һауанан ерҙәрҙе ҡарарға, һүрәткә төшөрөргә мөмкин буласаҡ. Нәҡ лидарҙар ҡулланып, Мексикала һәм Үҙәк Америкала ацтектарҙың боронғо ҡалаларын таптылар. Лидар биләмәне тулыһынса тикшерергә мөмкинлек бирә, йәғни урман булһынмы, йәки ҡуйы үлән менән ҡапланғанмы - күрер күҙгә күренмәгән боронғо ҡомартҡыларҙы табырға ярҙам итә. Беҙҙең төбәктең 60 процент биләмәһе урман менән ҡапланған булыуын иҫәпкә алғанда, был прибор бик ныҡ ярҙам итәсәк.

➔ **Заманса технологиялар яҡшы, әлбиттә, ләкин элекке ҡаҙылма эштәр ваҡытында табылған әйберҙәргә лә яңы музейҙа урын бүленәләр?**

- Музей әлеге ваҡытта уҡ иҫ киткес бай артефакттарға эйә. Шулай уҡ төрлө фәнни институттар һәм музейҙар беҙгә ярҙам итергә теләүҙәре хаҡында белдерҙе. Тағы ла беҙ республикаһың район, ҡала һәм хатта мәктәп музейҙарында булған әйберҙәрҙе ҡулланыу мөмкинлеген дә ҡарайбыҙ, шулай уҡ уларҙа булған билдәле экспонаттарҙың репликаһын эшләү турала ла уйлайбыҙ, иң мөһиме - музей интерактив менән тулыландырыласаҡ. Беҙҙең алда торған бурыс теге йәки был әйберҙе, тарихи экспонатты музейға ҡуйыуға ғына ҡайтып ҡалмай, ә уны ҡыҙыҡлы, кеше иғтибарын йәлеп итерлек итеп күрһәтеү. Ижади төркөм әлеге ваҡытта нәҡ ошо мәсьәлә өҫтөндә эшләй. Шулай уҡ күсмән халыҡтар тормошон яҡтыртыу өсөн яҡшы фильм-реконструкциялар төшөрөү ниәте лә бар.

➔ **Евразия күсмән цивилизациялар музейы Турахан кәшәнәһе янында буласаҡ, тигән инегеҙ. Был кәшәнәнән иғтибарҙы ситкә илтмәҫме?**

- Әлбиттә, юҡ. Буласаҡ музей биналары кәшәнә янындағы ландшафтты иҫәпкә алып проектланды, һәм улар бер нисек тә кәшәнәне ҡапламай, уның баһаһын төшөрмәйәсәк. Әлеге ваҡытта кәшәнәнән 10 саҡрымға тиклемге ара бик матур һәм асыҡ күренә, һәм был ландшафт музей төҙөлгәс тә мотлаҡ һаҡланасаҡ. Музейға килеүселәр кәшәнәгә табан атлағанда күсмән халыҡтар үткән юлды үҙҙәре үтеп ҡараған кеүек буласаҡ. Шунда уҡ беҙ башҡорт халҡы тарихының иң сағыу биттәрен күрә аласаҡбыҙ һәм уларҙың бөйөк номад цивилизацияһының мөһим өлөшө булыуын аңлаясаҡбыҙ.

Комплексҡа Бәләкәй кәшәнә лә индереләсәк, уның өҫтөндә беҙ археологик төҙрә эшләйбеҙ. Шулай уҡ ял итеү зонаһын, ландшафт амфитеатры, шишмә булдырыу ҙа ҡаралған. Ә юлдың арьяғында актив зона буласаҡ һәм унда ғилми үҙәк урынлашасаҡ, һабантуй һәм күсмән халыҡтар уйындары майҙаны, умарталыҡ, тирмә урынлаштырыласаҡ. Тағы ла комплекста төрлө оҫтаханаларға һәм сауҙа рәттәренә урын бүленәсәк, башҡорт аты, ыласын менән һунар итеү үҙәктәре ла буласаҡ.

Ағымдағы йылдың йәй уртаһына тиклем музей бинаһын проектлауҙы тамамларға һәм биш йыл эсендә уны төҙөп, экспонаттар менән тулыландырырбыҙ, тип уйлайым.

➔ **Ә донъяла тағы ла ошондай музейҙар бармы?**

- Сыңғыҙхан исемен йөрөткән күсмән халыҡтар музейы бөгөнгө көндә Улан-Баторҙа, ошондай уҡ профилдәге музейҙар тағы ла Ҡытайҙа, Иске Монголияла бар. Шулай уҡ Ҡаҙағстандың Астана ҡалаһындағы Милли музей тураһында ла онотоорға ярамай, тағы ла Ҡырғыҙстандағы Курманжан Датка исемендәге Күсмә халыҡтар үҙәген телгә алырға кәрәк. Рәсәйҙә иһә күсмән халыҡтар мәҙәниәтенә ҡағылышлы тик бер генә тарихи-мәҙәни үҙәк бар - ул Мәскәүҙәге бер мәктәп биләмәһендә урынлашҡан, йәғни сит илдә беҙҙең турала һөйләйҙәр һәм күрһәтәләр, ә үҙебеҙҙә иһә әле булһа был тема асылмайынса ҡала килә. Ошо бушлыҡты тулыландырыу мотлаҡ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Күсмән халыҡтар тормошо, һис шикһеҙ, тотош тарихтың мөһим бер өлөшө булараҡ төплө өйрәнеүҙе талап итә. Был, үҙ сиратында, ошо биләмәләрҙә көн күргән күсмән халыҡтар, шул иҫәптән башҡорттар тураһындағы мәғлүмәттең киңәйтелеүенә, бығаса иғтибарҙан ситтә ҡалған тарихи ваҡиғаларға иғтибарҙы йүнәлтеүгә этәргес көс буласаҡ. Киләсәк быуындарға боронғо ата-бабаларыбыҙ тураһында аныҡ, киң йөкмәткеле, ниндәйҙер бәхәстәргә урын ҡалмаслыҡ тарихи мәғлүмәт еткереү - беҙҙең изге бурыс. Шишмә районында асыласаҡ музей иһә ошо эшмәкәрлектең бер өлөшө булып тора ла инде.**

**Екатерина КЛИМОВИЧ**
**әңгәмә ҡорҙо.**




тайы башҡарма комитеты рәйесе Юлдаш Йосопов, тарихсы Салауат Хәмиҙуллин, БР Милли архивының бүлек мөдире Азат Ярмуллин, яҙыусы Ғәлим Хисамов, Башҡортостан Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге директоры Данир Ғәйнуллин, Башҡортостан Республикаһы Милли музейының генераль директоры Рөстәм Исхаҡов, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының республика "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Файзрахман Исмәғилов, Стәрлетамаҡ ҡалаһы һәм районы хәрби комиссары Рөстәм Ҡантимеров, Стәрлебаш районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Илдар Моратов һәм башҡалар ҡатнашты. Залда йыйылған ауыл халҡы, районың башҡорт теле һәм тарих уҡытыусылары, төрлө йәмәғәт ойошмаһы вәкилдәре тарихсылар сығышы аша тағы бер тапҡыр 1812 йыл ваҡиғаларын күҙҙән үткәрҙе, унда ҡатнашҡан яугир батырҙарҙың исемдәрен иҫкә алды. Был сығыштар Ҡаһым түрәнең Мырҙаш ауылы мәҙәниәт йортонда булдырылған, артабан да төҙөкләндереләсәк, тулыландырыласаҡ тарихи-этнографик музейының мотлаҡ кәрәклеге тураһындағы фекерҙе нығытты. Киләсәктә музей районда ғына түгел, республика кимәлендә билдәле тарихи-мәҙәни үҙәк булып, риүәйәттәрҙә, легендаларҙа һөйләнгән, йырҙарҙа йырланған Ҡаһым түрәнең данын арттырыр, тип ышаныуҙарын белдерҙе Мырҙаш ауылы халҡы. Ғөмүмән, тарихи ысынбарлыҡты асыу, батырҙарҙы халҡыбыҙға, илебеҙгә танытыу, улар өлгөһөндә илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләү, бәҫебеҙҙе арттырыу - ысын мәғәнәһендә яуаплы һәм мәртәбәле эш икәнен аңлап, музейҙы аяҡҡа баҫтырыу эшенә дәррәү тотонған улар. Уңыштар теләйек уларға.

**Илүзә ҠАРАҒОЛОВА.**
**Стәрлетамаҡ районы.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# АҠСА ҺӘМ ҒАИЛӘ

Кем дә кем ошо осорҙа балаһына етмәгән ваҡытын, иғтибарын аҡса менән алыштыра, әрәмтамаҡ һәм тормош көтөргә һәләтле булмаған кеше үҫтерәсәк. Балаһын ысынлап яратҡан кеше уның өсөн бөтөн эште эшләп ултырмаясаҡ, киреһенсә, уға ниндәйҙер ҡарарҙар ҡабул итергә өйрәтәсәк. Балаға еңел тормош теләмәгеҙ, уны ошо тормошта лайыҡлы йәшәй алырҙай итеп тәрбиәләгеҙ, һәләттәрен асырға ярҙам итегеҙ.

Әлбиттә, балаһына даими аҡса бирер торған әсәй уға бары тик изге теләктә, ул уны финанс мәшәҡәттәренән мөмкин тиклем араларға тырыша. Әммә киреһенсә килеп сығасаҡ. Балағыҙ киләсәктә проблемаларҙы үҙ аллы хәл итә алмаясаҡ, уларҙың үҙенә ышанысы ла юҡ, иртәгәге көн ҡурҡыу ғына уята. Балам киләсәктә уңышлы ҡатын-ҡыҙ, уңышлы ир-егет булыр тип, бәхет юғары белем алыуҙа, яҡшы эштә эшләүҙә һ.б тип үҫтермәгеҙ. Бөгөнгө көндә бәхетле булырға өйрәнһен бала. Бәхет менән аҡсаны ла бутарға ярамай. Бер проблема ла булмаһа, шул бәхет тип, беҙ нык яңылышабыҙ. Бер проблема ла булмаһа, кешене нәҫ, ялҡаулыҡ баҫа башлай. Проблемалар кешене үҫтерә генә.

20 йәштән өлкән балаларҙың иҡтисади йәһәттән үҙ аллы булыуына ҡыуанырға ғына кәрәк. Тәүратта тыңлауһыҙ ул тураһында тарих бар. Ул үҙенең мираҫын бүлеп биреүҙе талап итеп, сәйәхәткә сығып китә һәм бар аҡсаһын туҙҙырып ҡайта. Уны ата-әсәһе асыҡ йөҙ менән ҡаршы ала.

Бына был тарих бөгөн үҙенең актуаллеген юғалтҡан. Беренсенән, балалар өйҙән сығып китергә ашыҡмай. Уңайлы ла инде - унда йылы, һыуытҡыс бер ҡасан да бушамай, уянһаң, ашарға бешкән, төрлө түләүҙәр тураһында ишеткән дә юҡ. Бала ошо рәүешле үҙен уңайлы тормош менән тәьмин итеп, ялҡаулығының сигенә етеп, байрам ҡороп йәшәй.

Балам юҡ тигәндә белмәй, 30-ға етһә лә һаман ҡарайбыҙ, ти ҙә ата-әсә, бил бөгөүен дауам итә. Ошондай мөхиттә үҫкән бала һәр тукталышта булған кредит ойошмаларынан аҡса алырға ла өйрәнәсәк. Бына был һеҙҙең йомартлыҡ һәм балаға тик изгелек теләүҙең һөҙөмтәһе.

Әгәр ҙә ул башҡа сығып китһә лә, йәшәү өсөн аҡсаны һеҙ бирәсәкһегеҙ. Дөрөҫөрәге, аҡса бирә торған ойошма булып ҡаласаҡһығыҙ. Һеҙгә ул тап шулай тип ҡарай, атай менән әсәй тип ҡараһа, һеҙҙе йәлләр ине. Ипотеканы, машинаның кредитын, түйҙы, өйәндәргә кәрәкле әйберҙәрҙе түләйәсәкһегеҙ. Томас Дж.Стенли менән Уильям Д. Данко ошо йәһәттән ҡыҙыҡлы мәғлүмәт туплаған. Ата-әсәнән гел аҡса алып йәшәгәндәр юрғанына ҡарап аяҡ һуҙа белмәй. Улар әйберҙең кәрәклеһен дә, йышыраҡ кәрәкмәгәнен дә һатып ала. Кредитты ла йышыраҡ ала, тимәк, бурыстары ла күп була, бурыс соҡоронан сығыуы уға йылдан-йыл ауырлаша. Ундайҙарҙың саҡ ҡына ла һаҡлап һалып ҡуйған аҡсаһы булмай. Уларҙың йыллыҡ килеме лә бәләкәй, тимәк, буштан килгәнгә өмөт иткәс, үҙе аҡса табырға ынтылмай ҙа, ялҡаулы ла килә, хатта эшләп ашау тигәндә белмәй ҙә.

Үҙегеҙ бай түгелһегеҙ икән, бала тыуғас та ай һайын аҙ ғына күләмдәге сумманы банктағы иҫәпкә һалып барығыҙ. Бала машина йөртөү өсөн таныҡлыҡҡа уҡырға, уҡыу өсөн түләргә, хатта ниндәйҙер эш башлап ебәрергә ошо аҡсаларҙы тотонһон.

**Бодо ШЕФЕР.**



### 6 ФЕВРАЛЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.10 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.50 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20 Д/ф "Рождение легенды". Бриллиантовая рука". [12+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.45 Д/ф "Леонид Гайдай. Все бриллианты короля комедии". [12+]
12.45, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пробуждение". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25, 0.55 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
0.10 Д/ф "Гиена Европы". [16+]
2.30, 3.30 Т/с "Каменская-4". [12+]
4.23 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Байык" представляет... [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Спортивная история. [12+]**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 23.45 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**16.00 Память сердца. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 2.30 История одного села. [12+]**
**18.00 "Бай". [12+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Бала-сага. [6+]**
**1.00 "Между небом и землей". [12+]**
**2.45 Автограф. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**

### 7 ФЕВРАЛЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пробуждение". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Каменская-4". [12+]
3.50 Т/с "Личное дело". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Надо знать. [12+]**
**11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 2.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 0.15 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**17.00 Автограф. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 "Елкән". [6+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - ЦСКА (Москва). КХЛ.**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Д/ф "Муртаза Рахимов". [12+]**
**1.00 Спектакль "Три аршина земли". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

### 8 ФЕВРАЛЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пробуждение". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Каменская-4". [12+]
3.50 Т/с "Личное дело". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**10.30 История одного села. [12+]**
**10.45 Әлләсе... [6+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.45 Интервью. Доступная среда. [12+]**
**15.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 История признания. [12+]**
**18.00 Д/ф "История одной любви. Альбина и Фанис Исхаковы". [12+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Специальный репортаж. [12+]**
**0.45 Спектакль "Наследство". [12+]**

**2.15 "Бай". [12+]**
**2.45 Үткән гүмер. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 9 ФЕВРАЛЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 20.20 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
20.00 Вечерние новости (с субтитрами).
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Пробуждение". [16+]
22.45 "Большая игра". [16+]
23.45, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Склифосовский". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Каменская-4". [12+]
3.50 Т/с "Личное дело". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Алтын тирмә". [0+]**
**10.45 Надо знать. [12+]**
**11.00 Д/ф "Над полями, льдами и лесами. Авиационные работы". [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45, 3.15 Счастливый час. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**15.00 "Сулпылар". [0+]**
**15.30 "Гора новостей". [6+]**
**15.45 "Городок АЮЯ". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Формула меда. [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**18.00 Башкорттар. [6+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Куньлунь Ред Стар" (Пекин). КХЛ.**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**1.15 Спектакль "Вишневая гора". [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

### 10 ФЕВРАЛЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро". [0+]
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". 10-й юбилейный сезон. [0+]
23.25 Х/ф Премьера. "Каникулы в Африке". [16+]
1.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
23.55 Улыбка на ночь. [16+]
1.00 Х/ф "Хочу быть счастливой". [12+]
4.10 Т/с "Личное дело". [12+]
4.59 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [6+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 22.00, 6.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Слово Земли. 2.0. [12+]**
**12.45, 5.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.15, 17.45 "Курай даны". [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 1.30 Новости (на баш. яз).**
**13.45, 5.30 Автограф. [12+]**
**14.15, 19.45, 23.45, 2.00 История одного села. [12+]**
**15.00 "АйТекә!" [6+]**
**15.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 Патриот РФ. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [0+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.00, 3.00 "Честно говоря". [12+]**
**20.00 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Башкорт йыры". [12+]**
**21.15 История признания. [12+]**
**23.00, 3.45 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Спектакль "Февраль. Буран". [12+]**
**2.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**4.30 "Бай". [12+]**

### 11 ФЕВРАЛЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота". [0+]
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "ПроУют". [0+]
11.10 Премьера. "Поехали!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф "Разговор по душам". К 95-летию Вячеслава Тихонова. [12+]
13.15, 18.20 Т/с "Семнадцать мгновений весны". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.35 Премьера. К 100-летию отечественной гражданской авиации. Праздничный концерт в Кремле. [12+]
23.40 Д/ф "Дамир вашему дому". [16+]
0.35 Х/ф "Трудности адаптации". [18+]
2.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
12.00 Доктор Мясников. [12+]
13.05 Т/с "Время дочерей". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Море. Солнце. Склифосовский". [12+]
0.40 Х/ф "Пока смерть не разлучит нас". [12+]
4.05 Х/ф "Предсказание". [12+]
5.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30, 19.00 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 "Это моя профессия". [12+]**
**9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 "КультУра". [6+]**
**11.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Полезные новости. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Витязь" (Московская область КХЛ.**
**19.30, 3.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.15 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байык" представляет... [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 1.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Минең Рәми". Финал межрегионального поэтического конкурса. [12+]**
**2.15 Спектакль "Руди - never off". [12+]**
**4.30 Тормош. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Мистический Башкортостан. [12+]**

### 12 ФЕВРАЛЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Д/ф "Вячеслав Тихонов. Разговор по душам". [12+]
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 "Часовой". [12+]
8.15 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 "Жизнь других". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.05 Х/ф "Экипаж". К 100-летию отечественной гражданской авиации. [12+]
16.50 Д/ф Премьера. "Михаил Задорнов. От первого лица". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
22.35 Т/с Премьера. "Контейнер". [16+]
23.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.15, 2.15 Х/ф "Любовь не по правилам". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
12.00 Большие перемены.
13.05 Т/с "Время дочерей". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Д/ф "Веймарская республика". [16+]
3.58 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [0+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Курай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 "Дорога к храму". [0+]**
**16.00, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**16.30 Полезные новости. [12+]**
**16.45 "Честно говоря". [12+]**
**17.30 Творческий вечер народной артистки РБ Танзили Узянбаевой. [12+]**
**19.15 Әлләсе... [6+]**
**20.00, 4.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**20.30 Патриот РФ. [12+]**
**20.45 Д/ф "Над полями, льдами и лесами. Авиационные работы". [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.30, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Воспевая наследие веков". Юбилейная программа, посвященная 30-летию ансамбля песни и танца "Мирас". [12+]**
**1.45 Спектакль "Черный иноходец". [12+]**
**3.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БР ТЕАТР ЭШМӘКӘРҘӘРЕ СОЮЗЫНА - 85 ЙЫЛ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**2-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Кәмәлек. Ләм. Атавизм. Абыз. Умарта. Уран. Мал. Литр. Али. Нарком. Ҡуныс. Андыҙ. Шахмат. Ландшафт. Авсахов. Ираҡ. Әҙәп. Ашуғ. Әҙәм. Ауыҙ. Әбәк.

**Вертикаль буйынса:** Ураҡсин. Атаман. Ата. Силос. Азамат. Аманат. Айн. Муллагилдин. Вәғәҙә. Ихата. Ай. Кәлимуллин. Штамп. Мүк. Рухани. Рюрик. Аҡшам. Таяҡ.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Февраль (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (15) дүшәмбе | 7:29 | 8:59 | 13:30 | 16:34 | 18:01 | 19:31 |
| 7 (16) шишәмбе | 7:27 | 8:57 | 13:30 | 16:35 | 18:03 | 19:33 |
| 8 (17) шаршамбы | 7:25 | 8:55 | 13:30 | 16:37 | 18:05 | 19:35 |
| 9 (18) кесе йома | 7:23 | 8:53 | 13:30 | 16:39 | 18:07 | 19:37 |
| 10 (19) йома | 7:21 | 8:51 | 13:30 | 16:41 | 18:09 | 19:39 |
| 11 (20) шәмбе | 7:19 | 8:49 | 13:30 | 16:43 | 18:11 | 19:41 |
| 12 (21) йәкшәмбе | 7:17 | 8:47 | 13:30 | 16:45 | 18:13 | 19:43 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## МӘРХӘМӘТ

**Ислам динендә шәфҡәтлелек һәм ярҙамсыллыҡ мәрхәмәт тип атала.**

Аллаһы Тәғәлә үҙе донъяла ла, әхирәттә лә бик миһырбанлы. Мосолман да ҡаты бәғерле булырға тейеш түгел. Күңелендә шәфҡәт һәм мәрхәмәт йөрөткән кеше төрлө хөрмәткә лайыҡ. Бөйгөмбәребеҙ бер хәҙисендә былай ти: "Аллаһы Тәғәлә рәхмәт үә мәрхәмәтен йөҙ өлөшкә айырҙы. Уның туҡһан туғыҙ өлөшөн үҙ янында ҡалдырып, ҡалғанын Ер йөҙөнә төшөрҙө. Бына шул бер өлөш мәрхәмәт арҡыы кешеләр бер-береһенә шәфҡәтле булыр".

Ҡаты күңеллеләр, башҡаларға золом һәм ғазап ҡылыусылар донъяла ла, әхирәттә лә бәхетле була алмай. Ислам дине ҡаты күңеллелекте харәм ҡыла. Мосолман кешелеккә генә түгел, хайуандарға, ҡоштарға ла, ҡыҫҡаһы, барса тәбиғәткә ҡарата мәрхәмәтле булырға бурыслы.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**7 февраль "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев, А. Абушахманов инсц.), провинциаль проза. 16+

**10 февраль "Февраль. Буран..."** (З. Бураҡаева). 12+

**11 февраль "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+

**12 февраль "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**11 февраль "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев), трагикомедия. 18.00 12+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**7 февраль "Песочная фантазия"** М. Зәйнетдинов һәм А. Биксурин. 6+

**10 февраль "Сая киләсәкте һөйләр Ишкурай"** И. Илбәков концерты. 6+

**11 февраль "В ожидании чуда. Волшебные струны: арфа".** 0+

**"Шахерезада и другие"** Концерт. 18.00 6+

**12 февраль Премьера! "Moz-art".** 15.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**8 февраль "Һәйбәт ҡыҙыҡай Лида"** (А. Ивашкин), трагикомедияһы менән Күмертау ҡалаһында. 12+

**9 февраль "Һәйбәт ҡыҙыҡай Лида"** (А. Ивашкин), трагикомедияһы һәм "Алға, Баламишкин!" (Ф. Бүләков), музыкаль комедияһы менән Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылында. 12+

**10 февраль "Йөрәк майым"** (Б. Абдуразаков), мелодрамаһы менән Йылайыр районы Юлдыбай ауылында. 13.00 12+

**"Алға, Баламишкин!"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедияһы менән Матрай ауылында. 12+

**11 февраль "Диңгеҙ. Утрау. Хазина".** (Д. Сәлимйәнов), әкиәт. 13.00 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**11 февраль "Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 18.00 12+

**12 февраль "Морозко"** концерт. 12.00 0+

**"Нисек кейәүгә сығырға?.."** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 18.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**9-10 февраль "Таңбатыр"** (М. Ғиләжев), әкиәт. 11.00, 13.00 0+

**11 февраль "Таңбатыр"** (М. Ғиләжев), әкиәт. 12.00 0+

### БР Милли музейы

**10 февраль "Таш быуат. 1-се өлөш: палеолит"** археология түңәрәге. 11.00 6+

**"214-се уксылар дивизияһы. Сталинградты ҡаһармандарса һаҡлау"** күсмә күргәҙмә. 15.00 12+

**11 февраль "Сулпылар сыңы"** оҫталыҡ дәресе. 12.30 6+

**"Уралдың ер аҫты байлыҡы".** 13.30 6+

**12 февраль "Кинопоиск"** квест. 15.00 6+

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ОШО ИНДЕ...

## илһөйәрлек мәктәбе

**(Дауамы. Башы 1-се биттә).**

"Еҙем-Фест" фестивале тәбиғәттең хозур бер урыны - "Красноусол" шифаханаһы янында ("Торатау" геопаркы биләмәһе) шаулап-гөрләп үтеп китте. Күп кеше ҡатнашлығындағы сараны Мәҙәни башланғыстарға булышлыҡ итеү Президент фонды ярҙамы менән "Тархан" туристик операторы һәм Ғафури районы хакимиәте ойоштorҙо. Фестивалгә Өфө, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Салауат, Күмертау, Бөрө ҡалаларынан, Учалы, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Ауырғазы, Ейәнсура районларынан, Киров ҡалаһынан йәмғеһе 700-ҙән ашыу ҡунаҡ килде. Сараны асыу тантанаһында район хакимиәте башлығы Фәнзил Сыңғыҙов һәм абруйлы ҡунаҡтар: РФ Дәүләт Думаһы депутаттары Эльвира Айыткolова менән Наталья Костенко (Дәүләт Думаһының туризм һәм туристик инфраструктураны үҫтереү буйынса комитет рәйесе урынбаҫары), "Тархан" йәмғиәте директоры Илдар Бикҡужин ҡатнашты.

Махсус йыһазландырылған спорт майҙансыҡтарында "Мәргән уҡсы", "Бәйге" башҡорт күпбәйгеһе ярыштары уҙғарылды. Халыҡ "Бәйге" күпбәйгеһенең ҡышҡы форматында "таяҡ тартыу", "суҡмар ырғытыу", "тартәтәр", "арҡан тартыу", "ҡышҡы "боҙ этеү" кеүек киң таралған бишбашҡорт халыҡ уйынын тамаша ҡылды. Өс бәйгелә 160-ҡа яҡын һәүәҫкәр спортсы, ә уҡ атыуҙа сәләмәтлек мөмкинлектәре сикләнгәндәр ҙә ҡатнашты. Ойоштороусылар ҡунаҡтарға бай мәҙәни-күңел асыу программаһы ла тәҡдим итте: аттарҙа һәм саналарҙа йөрөргә мөмкин булды, балалар һәм ғаиләләр өсөн оҫталыҡ дәрестәре, ҡарҙа һүрәт төшөрөү кеүек ижади конкурстар һәм күңелле старттар ойошторолдо. Майҙансыҡта һөнәрселәр күргәҙмә-йәрминкәһе эшләне. "Бишбармаҡ" кулинария студияһы башҡорт милли аш-һыуы - бишбармаҡ әҙерләп, уны ҡоротлап, ҡунаҡтарға тәҡдим итте. Һөнәрселәр йәрминкәһендә халыҡ кәсептәрен тергеҙеүсе Фаил Байшогоров үҙенең агастан эшләнгән өлгөләрен тәҡдим итте, һәүәҫкәр тарихсы, археолог Һаҙый Юлмөхәмәтов боронғо археологик ҡаҙылма әйберҙәрен күргәҙмәгә сығарҙы. Красноусол "Агинәй" йәмғиәт ойошмаһы ағзаларының буҙа, ҡорот, эремсек, төрлө ҡамыр, ит ризыҡтарынан торған күргәҙмәһе эргәһенән дә халыҡ өҙөлмәне.

Сәмле спорт бәйгеләрендә ҡатнашыусы командалар бик күп булды. Көстө-таҫыллылыҡты һынауҙың төрлө төрҙәрен үҙ эсенә алған "Бәйге" күпбәйге ярышында ғафуриҙарға етеүсе булманы, улар 1-се урынға лайыҡ булдылар. Стәрлетамаҡ районы командаһы - 2-се, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы һәм БР Эшҡыуарлыҡ һәм туризм министрлығы командалары 3-сө урын яуланы. "Мәргән уҡсы"ла иргеттәр һәм гүзәл заттар араһында ирле-ҡатынлы Лилиә менән Рәйес Низаметдиновтар, малайҙар араһында Батырхан Ғайсин, ҡыҙҙар араһында Зарина Зарипова еңеүсе булды.

Фестиваль һәр кемдең күңеленә хуш килде, барыһы ла ойоштороусыларға рәхмәтле булды һәм усаҡ тирәләй барлыҡ ҡатнашыусыларҙың күмәк дуҫлыҡ әйлән-бәйләнә менән тамамланды.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Хәбәребеҙҙең башында телгә алған Ишембайҙағы 2-се Башҡорт гимназия-интернатының "Аҡтайлаҡ" командаһын уҡытыусы-тренер Зөһрә Иҫәнова етәкләй. Уларҙы республикала үткән барлыҡ "Мәргән уҡсы" бәйгеләрендә лә күрергә мөмкин. Улар барыһынан да айырылып тора, мәргәнлеге менән дә, кейемдәре менән дә. Кейем тигәндәй, "Мәргән уҡсы" ойошмаһы тәүҙән үк бәйге тотоусылар алдына башҡорт халҡының боронғо, тарихи милли кейемендә ҡатнашыу талабын ҡуйғайны. "Аҡтайлаҡ" командаһы был талапты бик теүәл үтәүселәрҙән. Сөнки атаәсәләре балаларының арыу ғына сығымдар ҙа кәрәк булған ошо ҡыҙыҡһыныуын хуплай, кейемен дә тектерә, уҡһаҙаҡ-йәйә өсөн дә аҡса йәлләмәй, үҙ машинаһында төрлө ярыштарға ла йөрөтә, хатта был һөнәрмәнлеккә үҙҙәре лә ылыға (Был - башҡа ата-әсәләргә ишара булды). Бына шундай үҙенең матур традициялары булған "Аҡтайлаҡ" командаһы ағзалары "Еҙем-Фест" сараһында ла ҡатнашты, призлы урындар ҙа яуланы. Иң мөһиме, был бәйге бәләкәй ҡатнашыусыларҙың йөрәгенә үҙҙәренә ышаныс, көс, тырышлыҡ, илһөйәрлек кеүек һабаҡтар, ынтылыштар, ут оҫҡоно ҡундырҙы. Былдай сараларҙың әһәмиәте лә шунда бит инде.**

**Индира ИШКИНА.**

АФАРИН!

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ ЙӘНҺҮРӘТ



**Башҡортостандың мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһендәге ҡаҙаныштарын баш ҡала майҙансыҡтарында күрһәтеү изге традицияға әүерелде. Быйыл әле 29 ғинуарҙа Мәскәүҙә йәнә әһәмиәтле мәҙәни ваҡиға булды - Кино йортонда "Төньяҡ амурҙары" йәнһүрәтенең исем туйы уҙҙы.**

Был йәкшәмбе кисендә Аҡ залда аншлаг ине, күп ғаиләләр балалары менән килгәйне. Премьераны абруйлы ҡунаҡтар, мәҙәни йәмғәтселек вәкилдәре лә ҡараны. Тамашасыларҙы Башҡортостандан сенатор, Федерация Советының фән, мәғариф һәм мәҙәниәт комитеты рәйесе, Рәсәй башҡорттарының федераль милли-мәҙәни автономияһы рәйесе Лилиә Ғүмәрова, Башҡортостандың мәҙәниәт министры урынбаҫары Алмаз Сәйетов һәм Кино йорто директоры, танылған режиссер-документалист Екатерина Головня сәләмләне. "Мин Башҡортостанга һәр ваҡыт беҙгә премьера күрһәткәне, тамашасыларҙың, етәкселектең һәм Башҡортостан өсөн әһәмиәтле кешеләрҙең әүҙем килгәне өсөн рәхмәтлемен, - тине Екатерина Головня. - "Төньяҡ амурҙары" - үҙенсәлекле анимация фильмы, унда башҡорт халҡының фольклор традициялары һәм героик эпосы сағылдырылған. Бөгөн балаларға илебеҙҙең тарихи милли ваҡиғалары тураһында аңлайышлы итеп һөйләү үтә мөһим..."

Алтмыш минутлыҡ фильм тамашасылар өсөн бер тынала үтеп китте, зал көслө алҡыштарға күмелде. Йомағужа батыр, аҡыллы Ҡылысбай, солоҡсолар Ихсан менән Усман, йәш егет Ғәбит, яугир ҡыҙ Агдалия тамашасыларҙың күңеленә хуш килде.

- Республика етәксеһе Радий Хәбиров билдәләүенсә, "Төньяҡ амурҙары" йәнһүрәте - илһөйәрлек рухында тәрбиәләү өсөн шәп ҡулланма. Беҙгә бер нәмә лә уйлап сығарырға кәрәкмәй, тарихҡа мөрәжәғәт итеү ҙә етә. Бик сифатлы фильм. Балалар өсөн ошондай ысын фильмдар күберәк булһын ине! - тине Лилиә Ғүмәрова.

Йәнһүрәтте республика етәксеһе булышлығында Өфөнөң "Муха" студияһы Әмир Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы менән берлектә төшөргән. Ике телдә яңғыраған "Төньяҡ амурҙары" йәнһүрәтен федераль прокатҡа май аҙағында сығарыу күҙаллана.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯМАНҒА ЯҠЫН БАРҺАҢ...

## бәләһе йоғор

Байға ялынам тип, ярлының йөҙ һумлыҡ хаҡы сыҡҡан.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ерҙә йәшәү, бәлки, ҡыйбаттыр ҙа, ләкин йыл һайын һеҙ ҡояш тирәләй бушлай сәйәхәт итәһегеҙ бит.

**(Эшли Бриллиант).**

Бәлки һин, үҙең дә белмәйенсә, Американы асаһындыр. Колумб та быны белмәгән бит.

**(Веслав Брудзиньский).**

Артыҡ булһа, хатта батырлыҡтың да хаҡы юҡҡа сыға.

**(Кароль Бунш).**

Мин нимә уйлағанымды аңлар өсөн яҙам.

**(Дэниел Бурстин).**

Бер ҡасан да: "Мине ярат!" - тимәйҙәр, был бер ниндәй һөҙөмтәгә лә килтермәй. Ләкин Аллаһы Тәғәлә гел шулай ти.

**(Поль Валери).**

Шулай ҙа беҙ үҙебеҙҙе бик насар беләбеҙ. Ярай әле, бүтәндәр беҙҙең турала тағы ла әҙерәк белә.

**(Януш Васильковский).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ваҡыт балтасы утын артыпан урманға киткән һәм унда Изге кешене осратҡан. Изге кеше шулай тигән: "Гел алға бар, дуҫым!" Өйгә ҡайтҡас, балтасы Изге кешенең һүҙҙәре хаҡында бик оҙаҡ уйланған һәм шундай ҡарарға килгән: "Иртәгә урманға тәрәнерәк инәсәкмен".**

**Икенсе көнөнә ул ҡарар ителгәнсә эшләгән һәм яңы урында матур агаслыҡ табып, уларҙы ҡырҡып тейәп, алып ҡайтып һатҡан. Ахырҙа, бай кеше булып киткән. Күп тә үтмәгән, балтасы Изге кешенең һүҙҙәрен тағы иҫкә төшөргән, урманға тәрәнерәк инеп, йылға янында көмөш яткылығы тапҡан. Был байлыкты ла баҙарҙа һатҡан, тағы бик күп аҡса алған.**

**Бер нисә көндән балтасы яңы ҡарарға килгән: "Изге кеше бит туктаһып ҡалырға тимәне, гел алға барырға ҡушты". Балтасы тағы урманға юл тоткан, хәҙер инде йылғаны ла кисеп сыҡҡан. Унда алтын ятҡылығы тапкас: "Бына ни өсөн Изге кеше тукта- майынса алға барырға кәңәш иткән!" - тип ҡыуанған.**

**Кеше нимә менән генә шөғөлләнһә лә, алға ынтылыу, алға барыу аша тәжрибә туплай. Нимәгәлер өлгәшһәгеҙ, әлбиттә, шатлыҡ кисерә алаһығыҙ, ләкин быны менән генә барыһына ла өлгәштем, тип уйлай күрмәгеҙ. Яңы үрҙәр яуларға ынтылышығыҙ һүнеп ҡалмаһын.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
3 февраль 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 3267
Заказ - 148